ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискә Өфө

24-30 ғинуар (һыуығай) 2015

№4 (630)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Эшҡыуарҙар ҙа...**



карттарға ярҙам итә ала 5

**Халҡыма һөйөү һүҙе...**



башҡортса яңғыраргә тейеш! 8-9

**Ашығып йәшәйем...**

Йәки Тыр-тыр менән бәләкәй әңгәмә



11

**Ҡартлығында...**

йән тыныслығына өлгәшеү өсөн эшлә



13

**ТВ-программа 14**


*Джеймс Аллен: "Аңыбыҙ баҡса кеүек, уны йә сүп үләндәренән таҙалап, утап торорға кәрәк, йә уны сүп баҫасаҡ. Нисек кенә булмаһын, аң - бәрәкәтле тупраҡ. Әгәр һеҙ уға маҡсатлы рәүештә кәрәкле орлоҡ һалып, тәрбиәләп, таҙартып торһағыҙ, ул һеҙҙе гөл-баҡса, емеш-еләк менән ҡыуандырыр. Әгәр ташлап ҡуйһағыҙ инде, әлбиттә, аңығыҙ ҡый менән тулыр". (13-сө биттә уҡығыҙ).*

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Ошо көндәрҙә Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты 70 йыллыҡ юбилейын билдәләй. Уны төрлө йылдарҙа тамамлап сығыусылар мәктәп хаҡында ниндәй хәтирәләр йөрөтә күңелендә?

**Рәүеф ӘЛМӨХӘМӘТОВ, "Банкос" фирмаһы директоры:** Минең өсөн интернатым оло тәрбиә мәктәбе, беҙҙе үҙаллы тормошҡа әҙерләп сығарған икенсе тыуған йорт булды, тип әйтә алам. Сөнки мин атайһыҙ үҫтем, шуға күрәлер ҙә, бәлки, ул миңә атай кеүек оло таяныс ине. Ғөмүмән, ул саҡ интернатта минең шикелле етем, ярым етем балалар күп уҡыны, ләкин беҙҙең был йәһәттән күңелебеҙ китек булманы, киреһенсә, интернат беҙҙә үҙебеҙгә ышаныс тыуҙыра белде, киләсәккә оло маҡсаттар ҡуйып йәшәргә һәм уға өлгәшергә өйрәтте. Шулай булмаһа, мин, ябай бер ауыл балаһы, союз кимәлендәге вузға уҡырға инеп китә алыр инемме икән? Урал политехник институтын уңышлы тамамлап сығыуым менән интернатыма бурыслымын. Артабан да үҙ һөнәрем буйынса эшләп, бер кимәлдә туҡталып ҡалмаҫҡа, заман үҙгәрештәренә ярашлы үҫешергә, камиллаша барырға тырышыуҙың да нигеҙендә мәктәбем сыныҡтырған ихтыяр, сәм ята. Тимәк, уҡытыусыларыбыҙ һәм тәрбиәселәребеҙ үҙҙәре ана шундай маҡсатҡа ынтылышлы, төплө белемле, позитив кешеләр булған. Интернатты тамамлағандар араһында мин эшкә ашмаған, йүнһеҙ бер генә кешене лә белмәйем, уларҙың барыһы ла ҡойоп ҡуйғандай камил белгестәр, ғалим һәм яҙыусылар, матур ғаилә башлыҡтары һәм илебеҙгә кәрәкле башҡа бик күп һөнәр эйәләре! Иң мөһиме, бер ғаилә балаларылай татыу йәшәргә, бер-беребеҙгә ярҙам ҡулы һуҙырға, туған телебеҙ һәм илебеҙ өсөн йәнен бирергә лә әҙер торған илһөйәрҙәр итеп тә тәрбиәләне беҙҙе интернат. Ғүмерем буйы рәхмәтлемен туған мәктәбемә!

**Йомабикә ИЛЬЯСОВА, шағирә, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай Рәйесе урынбаҫары:** Бала саҡ һәм үҫмер йылдарымдың иң матур һәм бай тойғолары Р. Ғарипов исемендәге ошо интернат-мәктәп менән бәйле. Иң тәүҙә уҡытыусыларыма рәхмәтлемен. Төрлө ауылдарҙан йыйылған төрлө яҙмышлы, төрлө характерлы балаларҙың күңелдәренә берҙәй үтеп инә алдылар һәм киләсәктә матур шытымдар бирерлек изгелек орлоҡтары сәсә белде улар. Мин уларҙы Бөйөк остаздар тип атауҙан да тартынмаҫ инем хатта, сөнки уҡытыусыларыбыҙ бындай баһаға бик тә лайыҡ. Шуныһы бигерәк тә күңелгә уйылып ҡалған: уҡытыусыларыбыҙҙың һәммәһе лә ғәжәп матурҙар ине - төҫ-баштары ла, кейемдәре, үҙҙәрен тотоштары ла, күңелдәре лә...Ихласлыҡтары, күңел йылылыҡтары, бала яратҡан кешеләр икәнлектәре йөҙҙәрендә сағыла ине уларҙың, шуға ла, күрәһең, уҡыусылар ҙа ихласлыҡ менән яуап бирә, яратҡан уҡытыусыларының күңелен ҡыйырға тырышмай ине. Ана шундай яратҡан уҡытыусылар арҡаһында математика, физика, химия кеүек беҙ өнәп бөтөрмәгән ҡайһы бер предметтар ҙа яратып, көтөп алынған дәрестәребеҙгә әүерелде. Мәхтүмә Ислам ҡыҙы Яхина (физика), Мәйсәрә Сәләхи ҡыҙы Әхтәмова (математика), Дамира Зәйнулла ҡыҙы Баймиева (химия), Гөлкәй Мәхмүт ҡыҙы Еникеева (тарих) һәм башҡа уҡытыусылар менән тап шулай килеп сыҡты ла инде. Былар яратҡан дәрестәребеҙ булһа, булмышыбыҙға ярашлы, башҡорт һәм рус телдәре һәм әҙәбиәттәре айырыуса яратҡан дәрестәребеҙ ине - һүҙ ҙә юҡ! Был йәһәттән беҙҙә рус әҙәбиәтенә һөйөү тәрбиәләгән Лена Ғәзиз ҡыҙы Арыҫланованың хеҙмәтен нисек билдәләмәй үтәһең! Ә шулай ҙа уҡыусыларҙа туған телебеҙгә, башҡорт әҙәбиәтенә һөйөү уятып, күңелдәрҙә тәүге ижад сатҡыларын ҡабыҙыусы тағы бер легендар шәхесте телгә алмайынса булмайҙыр. Сажиҙә Хәмәтйәр ҡыҙы Зайлалова ул. Һуғыштан һуңғы йылдарҙа байтаҡ ваҡыт интернат-мәктәп директоры ла булып эшләй. Аҙаҡ егерме йыл ошонда уҡ башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән уҡыта. Уның педагогик маһирлығын беҙҙе буй етмәҫ сер булып тойолған ижад донъяһына әйҙәүендә күрәм мин: уҡыусылары араһында ғалимдар, яҙыусылар, артистарҙың күп булыуы ана шул оҫталыҡҡа дәлил. Хәйер, Сажиҙә Хәмәтйәр ҡыҙы үҙе лә бит уҡытыусы-ғалимә булараҡ, эшенә бик ижади ҡараны, бик күп дәреслектәр яҙҙы, башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытыу буйынса методик ҡулланмалар эшләне. Тап ана шундай абруйлы шәхестәр эшләгәнгә күрә лә, балалар тырыш, тәртипле, татыу булдылар. Әле бына уйлап алдым да, үҙемә лә ғәжәп тойолоп китте: бер бүлмәлә 20 ҡыҙ йәшәнек! Һәм бер ниндәй ыҙғыш-талаш, шау-шыу булманы. Ошо түгелме ни ижади мөхит? Ваҡлыҡҡа, түбәнлеккә, бушҡа ваҡыт сарыф итеүгә урын юҡ ине интернатыбыҙҙа. Шуға ла уҡыуға, башҡараһы эшкә ижади, яуаплы мөнәсәбәт күптәребеҙҙең тормош кредоһына әүерелде лә инде.

(Дауамы 2-се биттә).

## АФАРИН!

# КИТАП ҺҮҘЕ...

## аҡылдың үҙе

**Баш ҡаланың үҙәк урамдарында бөйөк рус һәм башҡорт шағирҙары, яҙыусыларының цитаталары яҙылған реклама щиттары ҡуйылды. Бындай реклама кампанияһы Әҙәбиәт йылына старт бирелеүҙең үҙенсәлекле символы ла булып тора.**

- Был акция беҙҙең "беренсе ҡарлуғас" түгел, сөнки башҡа тематик йылдарҙа ла әсәләргә, ғаилә ҡиммәттәренә арналған әйтемдәрҙе, мәҡәлдәрҙе, яҙыусыларҙың әҫәрҙәренән өҙөктәрҙе реклама итеп урынлаштыра торғайныҡ. Ләкин уларҙың күләме аҙ булыу сәбәпле, бик күҙгә салынып барманы, ахыры. Әммә быйыл Рәсәйҙә һәм Башҡортостанда Әҙәбиәт йылы булараҡ, яҙыусыларҙың "ҡанатлы" һүҙҙәрен, мәҡәлдәрҙе күпләп урынлаштырыу идеяһын "Ҡала реклама үҙәге" МБУ-һы ла ҡуш ҡуллап күтәреп алды һәм буш торған щиттарҙы рухи аҙыҡ менән "һуғарҙы". 180 самаһы үҙенсәлекле реклама шунда уҡ халыҡтың һәм баш ҡала ҡунаҡтарының, ул ғына ла түгел, барлыҡ киң мәғлүмәт сараларының иғтибарын йәлеп итте...

(Дауамы 2-се биттә).




12+

✓ "Ниһайәт, үҙебеҙҙе Башҡортостандың баш ҡалаһында йөрөгәндәй хис иттек, күңелдәр үҫеп китте", "Транспортта барғанда бер рекламаны уҡып, икенсеһендә нимә яҙылған икән, тип, түҙемһеҙлек менән ҡарап бара башланыҡ".



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# БӘХЕТТӘРЕН СИТТӘ ЭҘЛӘМӘҺЕНДӘР

**Таңһылыу ҒӘЙНУЛЛИНА, Башҡортостан Республикаһы Яҙыусылар союзы ағзаһы, Сибай ҡалаһы башҡорттары ҡоролтайы ағзаһы:** Ил-йортҡа ауырлыҡ килгәндә халҡыбыҙ һәр ваҡыт бергә туплаңып, бер-береһен тыңлап, әрҙәмлашып, көрттәләрҙе дөйөм көс менән йырып сығырға тырыша. Әлеге көндә лә, тормош ауыр, тип зарланып ултырмайбыҙ, рухыбыҙҙы, телебеҙҙе һаҡлап, тарих арбаһында үҙ көйөбөҙҙә көйләп, үҙ һүҙебеҙҙе һөйләп китеп барабыҙ, Аллаға шөкөр. Әммә бөгөн донъя минут һайын үҙгәрештәр кисерә, яңылыҡтар, мәғлүмәттәр өҫкә ишерелеп килгән заманда йәшәйбеҙ. Шуның өсөн милләт именлеген, халҡының булмышын ҡайғыртҡан башҡорт үҙ дәүеренән алда барырға тейеш. Был поездың алдына сығыу, тигәнде аңлатмай, тик беҙгә планетар рәүештә фекерләргә, киләсәгебеҙҙе ҡайғыртып йәшәргә өйрәнергә кәрәк. Элекке социализм осорон көсәп, эш юклыҡына һылтанып, зарланып ятырға форсат юҡ. Шул тиклем шәп үткән ваҡыт менән бергә техника, йәшәйеш, йәмғиәттәге бөтә ҡиммәттәр ҙә үҙгәреш кисерә. Әйтәйек, былтыр һатып алған телефон, компьютер быйыл иҫке модель һанала, яңыһы, яҡшыраға уйлап табыла. Шуның һымаҡ, "Алма беш, ауыҙыма төш", тип ятып, үҙеңде үҙгәртә, артабан үҫешә алмайһың икән, һин иҫкегә әйләнәһең, йәмғиәткә кәрәгең дә ҡалмай. Үҙебеҙ йәшәгән осорҙоң ыңғай яҡтарын ил, халыҡ мәнфәғәттәрендә ҡулланып өйрәнһәк ине, тием. Сөнки милләттең киләсәге тырыш, үҙ эшенең белгесе булған, егәрле, аҡыллы кешеләр ҡулында.

Сибайҙа йәшәп, Баймаҡ районының Күсей ауылында 25 баш йылҡы малы көтөп, ҡымыҙ етештереп, мал үрсетеп, аҡса табыусы 77 йәшлек бер ағайҙы беләм. Ул башҡарған эште 27 йәшлек йәш егет эшләй алмайны ни? Күберәк эш хаҡы түләнгән ергә китеп, бил бөгөп, аҡса эшләү, тигән йәштәрҙең аңына һеңгән ҡалыплашҡан фекер бөгөн үҙгәрергә тейеш. Улар ошонда, Башҡортостанда, тыуған ерҙә булған мөмкинлектәрҙе униышлы файҙаланып, яңы уй-ниәттәрен, алдынғы идеяларын тормошҡа ашырыуҙы маҡсат итһен, бәхеттәрен ситтә эҙләмәһендәр ине.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Ошо көндәрҙә Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты 70 йыллыҡ юбилейын билдәләй. Уны төрлө йылдарҙа тамамлап сығыусылар мәктәп хаҡында ниндәй хәтирәләр йөрөтә күңелендә?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Гүзәл ЯУБАҪАРОВА, яуаплылығы сикләнгән "АС-проект" проект институты директоры:*** Интернатым - пар ҡанатым, тигән образлы һүҙҙәр бик урынлы, йәтеш әйтелгән! Уҡыусыларын оло тормош юлына - төплө белем һәм физаҡәр хеҙмәт бейеклектәренә күтәреүсе ҡанаттар ул беҙҙең интернат-мәктәбебеҙ. Бында күбеһенсә белемгә һыуһап, киләсәккә ҙур маҡсаттар ҡуйып килгән һәләтле балалар уҡый. Тимәк, улар аңлы рәүештә тыуған йортонан, ата-әсәһе, туғандары һәм дуҫтарынан айырылып, уҡырға, күберәк белергә тигән аныҡ маҡсат менән килә. Мине лә бында Башҡортостандың Өфөгә иң алыҫ райондарының береһе булған Йылайырҙан уҡырға, күберәк белергә, ҙур кеше булырға тигән хыял килтерҙе. Ул саҡта ла интернатҡа үҙенә күрә имтихан тапшырып, һайлап алалар ине. Мине ҡабул иттеләр, бик ҡыуандым, тырышып, гел "бишле"гә генә уҡыным. Һәҙмтәлә интернатты алтын миҙалға тамамланым. Хәҙер уйлайым: әгәр шул йылдарҙа хатта шәхси мәнфәғәттәре менән дә иҫәпләшеп тормайынса, бөтөн көстәрен беҙҙе кеше итергә тырышҡан уҡытыусыларыбыҙ, тәрбиәселәребеҙ булмаһа, күптәр, бәлки, ауылдарына кире ҡайтып та киткән булырҙар ине. Уларҙың эҙмыштары ла башҡа юлдан китер ине. Ләкин мин, мәҫәлән, башҡа төрлө эҙмышты күҙ алдыма ла килтерә алмайым, шуға ла интернатыма рәхмәттәр уҡыйым. Нимә генә тимә - интернатта барыбер уҡытыу һәр ваҡыт юғары кимәлдә ҡала килә. Әйтеүемсә, мәктәпте тамамлағандан һуң мин Ростов өлкәһе Новочеркасск политехник институтының төҙөлөш факультетына уҡырға инеп киттем. Баш ҡаламда күккә олғашҡан күп ҡатлы заманса йорттар төҙөргә хыялландым. Әлеге лә баяғы интернатта төплө нигеҙ һалынған белем кимәле институт уҡытыусылары, курсташтарым күҙенә салынмай ҡалмаһа, "Ниндәй мәктәптә уҡының һин?" тип ғәжәпкә ҡалған саҡтары йыш була ине. Был ул саҡта беҙҙе уҡытҡан педагогтарыбыҙ адресына ҙур баһа ине, әлбиттә. Беренсе урында белем кимәле булһа, интернатыбыҙҙың икенсе оло хеҙмәте - беҙҙе үҙаллы тормошҡа әҙерләү, характерҙарыбыҙҙы "сүкеү", йәғни сынылыҡтырыу булды, тип иҫәпләйем. Ҙур коллективта бер-береңә толерантлыҡ күрһәтеп, һыйышып татыу йәшәргә, ярҙамсыл, изгелекле булырға, тормош һынауҙары алдында юғалып ҡалмаҫҡа өйрәтте беҙҙе мәктәбебеҙ. Өҫтәүенә, тап интернатыбыҙ беҙҙе Тыуған илебеҙҙе, Башҡортостаныбыҙҙы, туған халҡыбыҙ менән әсә телебеҙҙе сикһеҙ һөйгән ватансылар, ысын мәғәнәһендә илһөйәрҙәр итеп тәрбиәләне. Эйе, ваҡытында берәй сит илгә китеп тә йәшәргә һәм эшләргә мөмкинлек булды. Әлеге лә дуҫтарым ял итергә ҡайҙалыр Баденгә саҡырһа ла хатта асыуым килеп китә: үҙебеҙҙең йәннәткә тиң Башҡортостаныбыҙ барҙа, сит илдәрҙең ары торһон! Барыбер үҙебеҙҙең илгә етмәй. Уҡытыусыларым Марат Мөхәмәтйән улы Хафизовҡа, Мәхтүмә Ислам ҡыҙы Яхинаға, Мәйсәрә Сәләхи ҡыҙы Әхтәмоваға, ул йылдарҙағы директорыбыҙ Хөсәйен Хәсән улы Яубаҫаровҡа оло рәхмәт хисе йөрөтәм күңел түрендә. Әйткәндәй, Хөсәйен Хәсән улы бынан алда байтаҡ йылдар республикабыҙҙың мәғариф министры урынбаҫары булып эшләп килгәнгә күрә, тәжрибәле педагог, оҫта ойоштороусы булыуы менән айырылып торҙо. Балаларға аталарса йылы мөнәсәбәте менән күңелгә инеп ҡалған. Алыҫ төбәктән килгәнгә күрәме, әллә ҡарарышлылығымды оҡшаттымы, минә гел иғтибарлы булды, ҡыҙы кеүек күрә ине. Яҙмыш барыбер туғанлаштырҙы беҙҙе: улына тормошҡа сығып, Хөсәйен Хәсән улының килене булырға насип итте Хоҙай. Бына шулай, интернат - минең ғаиләм, тип әйтә алам.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

АФАРИН!

# КИТАП ҺҮҘЕ...

## аҡылдың үҙе

**(Башы 1-се биттә).**

Реклама щиттары Яңы йыл алдынан ҡуйылғанлыҡтан, күптәр уны байрам бүләге тип ҡабул итте һәм, "Ниһайәт, үҙебеҙҙе Башҡортостандың баш ҡалаһында йөрөгәндәй хис иттек, күңелдәр үҫеп китте", "Транспортта барғанда бер рекламаны уҡып, икенсеһендә нимә яҙылған икән, тип, түҙемһеҙлек менән ҡарап бара башланыҡ", тип тә, башҡорт милләтенән булмаған граждандар иһә, "Башҡортса яҙыуҙарҙың русса тәржемәһен биреп булмаймы, беҙ ҙә нимә яҙылғанын, ниндәй яҙыусы нимә тип әйткәнен бик белгебеҙ килә", тип мөрәжәғәт иттеләр. Әлбиттә, киләсәктә барлыҡ тәҡдимдәрҙе иҫәпкә алырға тырышасаҡбыҙ. Әреклама щиттары йыл дауамында алмашынып торасаҡ, уларҙың йөкмәткеһе генә түгел, дизайны ла үҙгәрәсәк, - тине ҡала хакимиәтенең Гуманитар мәсьәләләр буйынса бүлек етәксеһе Зөлфиә Ханнанова.

Ғайса Хөсәйенов һәм Антон Чехов, Баязит Бикбай һәм Виссарион Белинский, Рәми Ғарипов һәм Николай Гоголь, Әнүәр Бикчәнтәев һәм Михаил Салтыков-Щедрин, Роберт Байымов һәм Федор Достоевский, Әхнәф Харисов һәм Максим Горький, Ҡәҙим Аралбай һәм Иван Гончаров, Ризаитдин Фәхретдинов һәм Николай Чернышевскийҙың һүҙҙәре, бәлки, кемделер ҡулына китап алып, һүҙ оҫталарының әҫәрҙәрен уҡырға этәргес тә булыр әле...




## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓21 ғинуарҙа Халыҡ-ара олимпия комитетының штаб-фатирында (Лозанна, Швейцария) Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Өфөнөң 2021 йылда XI Бөтә донъя уйындарын үткәреүгә дәғүә итеүсе ҡала сифатындағы презентацияһында сығыш яһаны. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, 2014 йылдың 29 июлендә Башҡортостан делегацияһы Бөтә донъя уйындарының Халыҡ-ара ассоциацияһының штаб-фатирына Өфөнөң 2021 йылғы XI Бөтә донъя уйындарын үткәреү хоҡуғына дәғүә итеү китабын ебәргәйне.

✓Өфөнән тыш, ошондай уҡ заявканы Перуның баш ҡалаһы Лима һәм Бирмингем (Алабама штаты) ҡалалары ла тапшырған булған. 21 ғинуарҙа үткән презентациянан һуң 2021 йылғы XI Бөтә донъя уйындарын үткәреү хоҡуғы шулай ҙа АҠШ-тың Бирмингем ҡалаһына бирелеүе билдәле булды. Өфөнөң әҙерлеге барыһынан да яҡшыраҡ булыуға ҡарамаҫтан, Халыҡ-ара олимпия комитеты ағзаларының ҡарарына Рәсәйгә ҡарата булған санкциялар йоғонто яһаны, тиген фекерҙә белгестәр.

✓Өфөлә федераль власть органдары етәкселәренең Башҡортостан Республикаһы буйынса баш федераль инспектор ҡатнашлығындағы координация кәңәшмәһе булып үтте. Билдәләнеүенсә, Башҡортостанда 2015 йылдың 1 ғинуарына ҡарата 68 мең Бөйөк Ватан һуғышы ветераны йәшәй. Торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаж һуғыш ветерандарының яҡынса һаны 1650 кеше тәшкил итә. Һуңғы ике йыл эсендә генә 2337 кеше шарттарын яҡшыртҡан. 2010 йылдан алып 8849 Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм уларҙың тол ҡатындары торлаҡ менән тәьмин ителгән. Шуға ҡарамаҫтан, тағы 150 кеше сиратта тора.

✓Башҡортостанда ветерандарҙы социаль яҡлауҙы яҡшыртыу буйынса системалы эш алып барыла. Йыл һайын ошо төркөмгә социаль ярҙам күрһәтеүгә 2 миллиард һумдан ашыу, шул иҫәптән республика бюджетынан 1800 миллиондан ашыу аҡса йүнәлтелә. Бирелгән мәғлүмәттәргә ярашлы, 2013 йылда өлкән йәштәге 53 меңдән ашыу кешегә хеҙмәт күрһәтелгән, ә 2014 йылда был һан 5,7 процентҡа арткан. Дөйөм алғанда, 3058 Бөйөк Ватан һуғышы ветеранына социаль ярҙам күрһәтелә.

КИЛЕШМӘЙЕМ!

# ҠАРА БӘХЕТ ТӘ БУЛАМЫ?



**Ваҡлашыу тип һанамаһығыҙ, һәр төрлө тантаналар айҡанлы бер-беребеҙгә матур теләктәр белдереү, ҡотлауҙар хаҡында булыр һүҙем, сөнки үҙ башыңа төшмәй тороп, тәбриклəү һүҙҙәре тураһында әллә ни уйланмайбыҙ икән, тигән фекергә килдем.**

Шулай бер көн бик тә ихтирам иткән әхирәтемде "түңәрәк кенә" юбилейы менән башҡортса гәзиттәребеҙҙең береһе аша ҡотларға булдым. Республикала ярайһы билдәле, талантлы, аҡыллы ҡатын ул. Әллә уның шәхесе алдында баҙаным, әллә гәзиткә яҙыу талапсанлыҡ талап итте минән - күнелгә үтеп инерҙәй матур һүҙҙәр килмәй ҙә ҡуя бит башҡа... Нимәләр генә яҙһам да, аҙ булыр төслө. Һис килештерә алмағас, һеңлемә мөрәжәғәт итергә булдым. Ни тиһәң дә, башҡорт теле уҡытыусыһы бит әле ул, тием инде үҙемсә. Уның ҡарауы, һеңлекәшем оҙаҡ баш ватып маташманы: биш минут үтеүгә, бер бит ҡотлау тексы алдымда ята ине. Шатланып ҡулға алдым да ул, тик уҡып сыҡҡас, үҙемдең тәүҙә уйлаған ҡотлау һүҙҙәрем күпкә яҡшыраҡ икәнен тойҙом. Һеңлем, ризаһыҙлығымды күреп: "Һуң, апай, шунан да яҡшыраҡ нимә яҙаһың, был ҡотлауҙы бит мин былтырғы гәзиттәрҙән күсереп алдым, журналистарҙан да арттырып булмаҫ инде, үҙең яҙ, улайһа", - тип кенә ҡуйҙы.

Дөрөҫөн әйткәндә, журналистар шәберәк тә яҙыр ине лә, тик ҡотлау тексын тәбрикләүсе кеше үҙе яҙа, баҫтырып сығарыу өсөн аҡсаһын түләй, шуғалыр ҙа, күрәһең, редакция тексҡа төҙәтмәләр индерә алмайҙыр, тип уйлайым. Тик хаталы булмауы ғына шарттыр. Юғиһә, бындай ҡотлауҙарҙа улар "аҡ бәхеттәр " тигән һүҙбәйләнеште ҡулланмаҫ ине, сөнки шундуҡ һорау тыуа бит: "ҡара бәхет" тә буламы ни улайһа?

Унан, телгә маһир хәбәрселәр юбилярҙы "төргөләп" тә маташмаҫ ине ул. "Яҡындарыңдың һөйөүенә төрөнөп йәшә" тигәнде, нисектер, ҡабул итә алмайым. Өшөгәндә, һыуыҡтан ҡалтыранғанда, мунсанан сыҡҡанда төрөнөргә була, ә бына ҡотлағанда...

"Ҡурай моңондай оҙон ғүмер" теләүҙә кемдеңдер еңел ҡулынан ҡалыпҡа әйләнеп китте, ниһайәт. Яҡын кешеләреңде ҡотлағанда, кемдер әйткән, уйлап сығарған әҙер ҡалыпты түгел - улар, бәлки, матур тойолһа ла, - ә үҙеңдең йөрәгеңдән урғылған изге теләктәреңде еткереү күпкә мөһимерәктер, тигән фекергә килдем мин. Шулай түгелме ни? Ғөмүмән, телмәребеҙҙе байытырға тырышайыҡ, тимен. Ә уның өсөн күберәк бер-беребеҙ менән аралашырға, китаптар уҡырға, әсәйҙәребеҙ ләғәттәрен иҫкә төшөрөп торорға кәрәктер...

**Фәрзәнә МӘРҘӘНШИНА.**

ИШАРА

# БАТЫРҘАР ҠАЙҘА?



**Күптән түгел "Зеркало для героя" тигән киноны ҡабатлап күрһәттеләр. Тәү тапҡыр ҡарағанда ҡайһы бер урындарын аңлай алмай ҡалғайным, шул сәбәпле, иғтибар менән тағы ла бер тапҡыр ҡарарға булдым.**

Әгәр һеҙ был фильмды ҡарамаған булһағыҙ, тип, ҡыҫҡаса һөйләп үтәйем. Ике ир бер парк аша үҙ-ара һөйләшә-һөйләшә үтеп барған саҡта, бер тимер сымға абынып, үҙҙәре үҫкән шахтерҙар поселогына, 1949 йылға күсәләр. Әллә күпме айҙар буйы, бер үк көндән үҙгәрмәй, ҡабатланып тороуының сәбәбен аҙаҡ төшөнә улар. Һәр береһе булған көсөн, мөмкинлеген бергә туплап, яуызлыҡҡа ҡаршы тора алһа ғына, үҙ ваҡытына ҡайта аласаҡ. Шул саҡта ғына туктап ҡалған ваҡыт ҡуҙғаласаҡ, алға ағасаҡ. Ирҙәрҙең олораҡ йәштәгеһе авария хәлендәге шахтаны яптырыуға өлгәшә. Һунынан эшселәрҙең эш хаҡын алып килеүсе инкассаторҙы үлтереүҙе ойоштороғға йыйыныусыны фашлап, властарға тапшыра, ә икенсе герой, йәш егет, репрессияға эләккән олатаһын ҡотҡарырға ташланып, ҡаты тукмала. Шул саҡ ҡына ваҡыт ҡуҙғала һәм улар әлеге ваҡытҡа кире ҡайта...

Бына әле миңә лә бер үк көн үтмәй ҙә үтмәй, айҙар, йылдар буйына үҙгәрмәй ҙә үҙгәрмәй кеүек тойола. Бер ниндәй ҙә алға китеш юҡ. Ошо бер төрлөлөккә хәҙер инде аптырай башлайһың. Һайлауҙар алдынан 4-5 йыл элек вәғәҙә иткән "алтын тау"ҙарҙы ҡабатлап, тағы вәғәҙәләйҙәр. Көҙгөлә, исмаһам, бер генә батыр ҙа салынмай. Сағылам, тиһә, әллә уныһын да тиҙ генә томалай һалалармы? Туҡталып ҡалған ваҡытты ҡуҙғатырлыҡ батырҙар күренмәй. Талаусылар - талай, таланыусылар - түҙә бирә. Ә әлеге киноның ни өсөн ошолай аталыуы - фәһем алырлыҡ ишара. Дөрөҫлөккә, гәҙеллеккә ынтылмайынса тороп, был донъяла атҡарылырға тейешле гәмәлдәрҙе атҡармай тороп, алға китеш булмаҫ...

# ЯҘМЫШЫБЫҘҒА КҮНДЕКМЕ?

**Һеҙ рәссам Петров-Водкинды беләһегеҙме? Уның "Купание красного коня" картинаһын белмәгән кеше юҡтыр. Ул революция, граждандар һуғышы йылдарында ижад итә. Уның автобиографияһын мин студент сағымда уҡып сыҡҡайным.**

Ун алты йәшлек үҫмер сағында, мәктәпте тамамлау ҡыуанысынан, киң, алыҫтарға йәйелеп ятҡан Волга йылғаһына табан йүгерә был. Өҫ кейемен һалып ташлап, күкһел саф һыу ҡосағына ташланып, алға табан йөҙә лә йөҙә, йөҙә лә йөҙә. Таныһығы ҡанып, саҡ ҡына арыуын һиҙеп, ярға табан йөҙәм, тиһә, яр күренмәй. Ҡаушауынан йүнәлеште лә юғалта. Волга йылғаһы яҙғы ҡар һыуҙарынан уғата ташҡын була - арғы яры ла, бирге яры ла күренмәй. Үҫмер, тырышып, тәүҙә - бер йүнәлештә, һунынан йүнәлешен ҡапма-ҡаршы яҡҡа үҙгәртеп йөҙөп, бөтөнләй арый. Ә ярҙар юҡ та юҡ. Көрәш мәғәнәһеҙ булып тойола уға. Яҙмышына буйһоноу хисе, татлы йоҡоға талыу һымаҡ, бөтә булмышын биләп ала. Бына йоҡоға китем, һыу төбөнә баттым, тигәндә, бер ишкәксе ҡарт килеп сығып, тегене әләктереп алып, ҡотҡарып өлгөрә...

Петров-Водкиндың үҫмер сағындағы был иҫтәлеге миңә аҙ һанлы милләттәрҙең киң дарьяла көрәшеп, арып, яҙмышына буйһоноп, йоҡоға талған әлеге заманды хәтерләтә. Был хәл шул сәбәптән иҫемә төштө. Ярҙар күренмәй шул. Әллә мин янылышаммы? Бик алыҫты күреү һәләтенә эйә ишкәксе ҡарт әле иҫәнме, ярҙамға ашыҡмаймы икән?..

**Фәүзиә ЯХИНА.**

ҺАБАҠТАР

# АРТТАН БУЛҺА ЭТЕҮСЕ...



**Ваҡытында алға атлаған бер аҙым... Үҙең теләп яһайһыңмы ул аҙымды, әллә арттан этеп ебәрәләрме - бөтә тормошоңдо үҙгәртә ала!**

...Биш кеше такси көтәбеҙ. Бөтәһе лә таныштар. Кемдер балаһын Өфөгә оҙата, кемдер йомош менән үҙе юлланған. Һөйләшәбеҙ, аралашабыҙ, шул арала оло юлдан күҙебеҙҙе алмайбыҙ. Сәғәт ярым тигәндә, балаларыбыҙ өшөп-туңып бөткәс, ыҡсым ғына автобус килеп туктаны. Ләкин бер генә урын, имеш... Ә бишебеҙ ҙә исем-фамилия менән бер нисә көн алдан уҡ сиратҡа яҙылғанбыҙ. Кемдер сумкаһын алырға бороолдо, кемдәрҙер ҡосаҡлашып, хушлаша башланы. Әле бер кем дә урындың берәү генә икәнен белмәй...

Осраҡлы ғына рәүештә беҙ иң алда автобусҡа яҡынлаштыҡ. Улым инергә тип аяғын беренсе баҫҡысҡа ҡуйҙы, артта сумкаһын тотоп атаһы тора, ҡыҙым менән мин күптән әйтәһе һүҙҙәребеҙҙе әйтеп, хушлашып бөтөп, ситтән күҙәтәбеҙ. Шофер ҡаты ғына итеп: "Куда прёте! Место только одно!" - тип екерҙе. Улым туктаны ла ҡатып ҡалды. Берике секунд үтте... "Бар!" тине атаһы һәм еңелсә генә улыбыҙҙы арҡаһынан ҡағып алға этәрҙе... Шулай ул ултырып китте. Ә туктаһын ғына ярышта яңынан 4 пассажир тороп ҡалды. Араларында оло йәштәгеләр ҙә бар...

Миңә ҡыйын булып китте. Сөнки беҙҙе бит улай тәрбиәләмәнеләр: минең тәрбиә буйынса эшләһәк, малайымды ингән еренән кире төшөрөп, уның урынына иң оло пассажирҙы ултыртып ебәрергә тейеш инек һымаҡ... Ҡайтҡансы намыҫым таланы: тегеләр нисек китте икән? Ә ирем шул тиклем ҡыуана. "Әгәр китә алмаһа, миңә төнгө юлға Өфөгә сығырға тура килер ине, бушамайым, иртәгә ҡара таңдан эшкә", - ти...

...Уйлап ҡараһаң, ябай ғына хәл һымаҡ. Ләкин мин үҙем шул пионер, комсомол тәрбиәһе менән үҫкәс, тормош юлымда ҡыйыу ғына алға баҫа торған күп аҙымдарымды үҙ ваҡытында яһай алманым: ниндәйҙер осраҡта оялдым, ҡайһы саҡта баҙнатһыҙлыҡ еңде, ҡайһы берҙә: "Ә минән арттағылар ни эшләр?" - тигән уй ҡамасауланы. Ә бит минән белеме, тырышлығы, ойоштороу һәләте һәм башҡа күп сифаттары буйынса түбәнерәк торған иптәштәрем шул аҙымды яһай торғайны... Күптәрен "йөнтәҫ ҡуллылар" ҡулдарынан тартып, ҡайһыларын ҡоҙа-ҡоҙағайы, апай-ағайы арттарынан этеп өҫкәрәк сығарҙы. Бик күптәре үҙе белгән урынға лайыҡ булмаһа ла, теше-тырнағы менән ултырыҫтарына йәбешеп ҡатҡан, тамыр һыҙа ебәрмәйҙәр... Хайран донъя! Ундайҙарҙы намыҫтары таламайҙыр, моғайын...

**Мәҙинә ЙӘҒӘФӘРОВА.**
**Әбйәлил районы Исхаҡ ауылы.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына арналған саралар сиктәрендә Өфө ҡала хакимиәтендә ветерандарҙы "1941-1945 йылдарҙа Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 70 йыллығы" юбилей миҙалы менән наградлау мәсьәләһе ҡаралды. Рәсәй Федерацияһы Президентының 2014 йылдың 4 июнендәге 175-р һанлы ҡарарына ярашлы, миҙал бирелергә тейешле кешеләрҙең исемлеге раҫланған. Өфө ҡалаһында юбилей миҙалын алырға хоҡуҡлы 15 мең самаһы ветеран иҫәпләнә.

✔Роспотребнадзорҙың Башҡортостан буйынса идаралығы пландан тыш тикшереүҙәр үткәрә ала. Был хаҡта идаралыҡ етәксеһе Евгений Степанов хәбәр итте. Тап ошо көндән яңы федераль закон ғәмәлгә инә, уның буйынса тикшереү органдары хеҙмәткәрҙәре рестораңдарҙы, магазиндарҙы һәм аҙыҡ сәнәғәте предприятиеларын иҫкәртеүһеҙ тикшерергә хоҡуҡлы. Яңы документ көсөнә ингәнгә тиклем ведомство 24 сәғәттән дә һунламайынса тикшереү хаҡында хәбәр итергә бурыслы ине. Хәҙер ревизорҙар предприятиеларға иҫкәртмәйенсә килергә хоҡуҡлы.

✔"Хәйбулла энциклопедияһы" өсөн материалдар йыйыу тамамлана. Проект "Башҡортостан энциклопедияһы" ғилми-нәшриәт комплексы менән хеҙмәттәшлек нигеҙендә әҙерләнә. Редакция коллегияһы Хәйбулла районында йәшәүселәрҙең барыһына ла райондың лайыҡлы кешеләре исемлегенә тәҡдимдәрен һәм өҫтәмәләрен индереү үтенесе менән мөрәжәғәт итә. Күренекле кешеләрҙең тулы исемлеге менән хакимиәттең рәсми сайтында танышырға мөмкин. Мәғлүмәтте haibenc@mail.ru электрон почтаһына ебәрергә кәрәк. Белешмә өсөн телефон: (34758) 2-19-20.

✔2014 йылда Өфө Рәсәй ҡалаларында йәшәү сифаты рейтингында 18-се урынды биләне. Тикшеренеүҙе Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте ҡарамағындағы Финанс университетының социология департаменты үткәргән. Түмән рейтинг лидеры тип танылған, артабан Мәскәү һәм Ҡазан ҡалалары килә. Рейтинг 500 мендән ашыу кеше йәшәгән 37 ҡала мәғлүмәттәре нигеҙендә төҙөлгән. Башҡортостандың баш ҡалаһы һаулыҡ һаҡлау өлкәһе һәм хәүефһеҙлекте тәьмин итеү буйынса рейтинг булексәһендә 13-сө һәм торлаҡ фонды хәле һәм хеҙмәтләндереү сифаты буйынса 17-се урынды биләй.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Киләһе йылдан компенсация 45 йәшкә тиклемге юғары белемле медицина хеҙмәткәрҙәренә лә, әгәр ауыл еренә йәки эшселәр ҡасабаһына икенсе ерҙән күсеп килгән осраҡта, биреләсәк.*



ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ЭШҠЫУАРҘАР ҘА...

## ҡарттарға ярҙам итә ала



**Быйылғы йылдың ғинуарынан Башҡортостан халҡын түбәндәге яңылыҡтар көтә:**

### Автобус урынына - аҡса

Быйылдан башлап күп балалы ғаиләләргә микроавтобустар биреү туҡтатыла. Мәғлүм булыуынса, бындай бүләк ошоға тиклем өс йылдан да кәм булмаған ваҡыт эсендә туғыҙ һәм унан күберәк бала тәрбиәләнеүсе ғаиләләргә бирелеп килә ине. Хәҙер иһә күп балалы ғаиләләргә 600 мең һум күләмендә аҡса тапшырыласаҡ һәм уны ниндәй мәнфәғәттәрҙә файҙаланыу яҡшыраҡ буласағын ғаилә башлыҡтары үҙҙәре хәл итәсәк.

### Ҡарауға бала алған өсөн

Яңы йылдан тәрбиәгә балалар алған опекун һәм патронат ғаиләләргә пособие арттырыла. Һәр бала өсөн уртаса алғанда 300-400 һумға күберәк түләнәсәк. Мәҫәлән, 2014 йылда бындай ғаиләләр 3 йәшкә тиклемге һәр балаға - 7 380, ә өлкәнерәктәренә 6 150 һум алған булһа, быйыл шуға ярашлы пособие 7 750 һәм 6 460 һум күләмендә түләнәсәк.

### Социаль хеҙмәт күрһәтеү

Был яңылыҡ социаль хеҙмәткәрҙәр ярҙамына мохтаж булғандарға ҡағыла. Социаль хеҙмәткәрҙәр өйгә килеп, хужалыҡ эштәрендә ярҙамлаша: йыуа, таҙарта, укол ҡаҙай йәки ашарға әҙерләй. Ниндәйҙер хеҙмәттәр бушлай, ҡайһылары өсөндөр түләргә кәрәк булһа, яңы законда бындай хеҙмәттәр менән файҙаланыусы һәр кем өсөн айырым программа эшләнәсәк. Унда кемгә ҡасан ниндәй ярҙам кәрәклеге ентекләп күрһәтелә.

Икенсе яңылыҡ - балиғ булмағандар, шулай уҡ этник-ара һәм ҡораллы бәрелештәрҙә имгәнеү алған кешеләргә бындай хеҙмәттәр бушлай күрһәтелә.

Быйылдан шулай уҡ шәхси эшҡыуарҙарға ла ҡарттарға ярҙам күрһәтергә рөхсәт ителде. Әлегә бындай тәжрибә республиканың ике районында ғына алып барыла. Әгәр ул яҡшы һөҙөмтәләр бирһә, яңылыҡ бөтөн республикаға таратыласаҡ.

### Фатирға һалым

Быйыл республика халҡы милек өсөн өҫтәмә һалым түләй башлаясаҡ. Ул кадастр хаҡы, йәғни Росреестр тарафынан фатирҙың милек баҙарында билдәләнеүсе хаҡы буйынса иҫәпләп сығарыласаҡ. Хаҡы 4 миллион һум булған фатир өсөн һалым - 0,1 процент, 4-7 миллионлыҡ өсөн 0,15 процент һ.б шундай тәртиптә билдәләнәсәк.

2019 йылға тиклем ошо тәртипкә күсеү осоро булып, өфөләр һалымдың күпмелер өлөшөн генә түләйәсәк. Мәҫәлән, 2015 йылда ҡала халҡынан тейешле сумманың ни бары 20 проценты, ә инде 2016 йылда 40 проценты түләтеләсәк. Инвалид балаларҙың ата-әсәләре, етем балалар һәм күп балалы ғаиләләр һалымдан азат ителә.

### Пенсия арта

2015 йылда февралдән пенсияға сираттағы индексация көтөлә. Пенсиялар яҡынса 10 процентҡа артасаҡ. Был планлаштырылған кимәлгә ҡарағанда күберәк, тип хәбәр итә РФ Пенсия фонды етәксеһе Антон Дроздов. Уның һүҙҙәре буйынса, уртаса айлыҡ пенсия 13 мең тәшкил итәсәк.

- Тәүҙә пенсияны 7,5 процентҡа арттырыу ҡаралғайны - инфляция буйынса бюджетҡа шундай күҙаллауҙар һалынғайны, - тип аңлатма бирә Пенсия фонды башлығы. - Күренеүенсә, бөгөн аҡсаның осһоҙланыу кимәле күпкә юғары буласаҡ. Илдең Иҡтисад үҫеше министрлығы мәғлүмәттәренә ҡарағанда, хаҡтарҙың артыуы 9,8 процент тәшкил итәсәк. Шуға ла, законға ярашлы, индексациялау инфляцияның аныҡ кимәленә ярашлы үткәреләсәк.

### Ауылға барып... миллион ал!

Рәсәй Хөкүмәте Рәйесе Дмитрий Медведев ҡул ҡуйған бойороҡҡа ярашлы, ауылға эшкә барған медицина хеҙмәткәрҙәренә бер тапҡыр бирелә торған компенсация түләүҙәренә (бер кешегә 1 миллион һум) Башҡортостанға федераль бюджеттан 50 миллион һум аҡса биреләсәк.

Дөйөм алғанда, "Һаулыҡ һаҡлауҙы үҫтереү" дәүләт программаһы сиктәрендә барлығы 3200 миллион һум бүленгән. Был Бөтә Рәсәй буйынса өҫтәмә рәүештә 6400 табипты ауыл ерҙәрендәге медицина учреждениеларына урынлаштырыуға ярҙам итәсәк.

Киләһе йылдан компенсация 45 йәшкә тиклемге юғары белемле медицина хеҙмәткәрҙәренә лә, әгәр ауыл еренә йәки эшселәр ҡасабаһына икенсе ерҙән күсеп килгән осраҡта, биреләсәк.

### Еңеллек тыуҙырыла

Быйылдан Рәсәй Хөкүмәте ҡарары нигеҙендә дәүләт һәм эшҡыуарлыҡ ойошмалары хеҙмәткәрҙәренә Рәсәй ҡалаларына командировкаға барғанда таныҡлыҡтар алып йөрөргә кәрәкмәйәсәк. Эш биреүсегә сәфәрҙең датаһы һәм ваҡыты күрһәтелгән поезд йәки самолет билеты ла етә.

Командировка таныҡлыҡтары "уларҙың йөкмәткеһе хеҙмәткәрҙәрҙе эш буйынса командировкаға йүнәлтеү тураһында бойороҡтоң йөкмәткеһен ҡабатлауы һәм уны тултырыу өҫтәмә хеҙмәт талап итеүе" арҡаһында бөтөрөлә, тип асыҡлыҡ индерелә ҡарарҙың аңлатмаһында. Хеҙмәткәрҙе икенсе ҡалаға эшкә ебәреү өсөн командировка бойороғо ғына кәрәк. Әгәр хеҙмәткәр сәфәргә шәхси транспортында барырға теләһә, бында барыһы ла бик ябай. Хеҙмәткәр командировкала булыу ваҡытын рәсми яҙыуҙа күрһәтергә тейеш буласаҡ. Шуның менән бергә сәфәрҙә шәхси транспортты файҙаланыуҙы дәлилләүсе документтарҙы ла тапшырыу зарур. Рәсәйҙән ситкә сыҡҡанда хеҙмәткәрҙәргә командировка таныҡлыҡтары кәрәкмәй ине, сөнки сиктե үтеү тураһында билдә сит ил паспортына ҡуйыла. Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһе илдәренә эшлекле сәфәргә барғанда ла борсолорға урын юҡ: сикте уҙғанда мисәт ҡуйылмаһа, хеҙмәткәрҙең эш буйынса барыуын билеттар менән дә раҫлап була.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

ҺОРАУ - ЯУАП

### ТҮЛӘЙ АЛМАЙБЫҘ

**Торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн ҙур бурыс йыйылды. Әлеге ваҡытта, финанс ауырлыҡтар кисереү сәбәпле, уны түләй алмайбыҙ. Беҙҙе фатирҙан ҡыуып сығара алалармы?**

- Коммуналь хеҙмәттәр өсөн бурыс 6 ай рәттән түләнмәгән булһа, муниципаль фатирҙан сығарып ебәрергә мөмкиндәр. Уның урынына ғаиләләге һәр кешегә 6 квадрат метрҙан да бәләкәй булмаған торлаҡ майҙан тура килгән икенсе торлаҡ бирәләр. Был хаҡта РФ Торлаҡ кодексының 90-сы статьяһында ҡаралған. Ләкин бер кемде лә фатирҙан суд ҡарарынан тыш сығара алмайҙар. Суд иһә бурыслының түләмәүе нигеҙһеҙ булған осраҡта ғына бындай ҡарар ҡабул итә ала. Йәғни эш хаҡы тотҡарланыу, эш урынын юғалтыу, ҡаты ауырыу һәм башҡа ошондай етди сәбәптәр арҡаһында түләү башҡарылмаһа, фатирҙан сығарыу тураһында һүҙ алып барылмай.

Әгәр ҙә инде фатир шәхси милектә һәм ул йәшәү өсөн берҙән-бер урын булһа, бындай яза һалынмай. Ләкин бурыслының икенсе торлағы бар икән, уны аукционда һаталар һәм килгән аҡсаң менән бурысты ҡаплайҙар. Был осраҡта милексегә, һатылғаны урынына, башҡа торлаҡ бирелмәй (РФ Гражданлыҡ процессуаль кодексының 446-сы статьяһы).

### ӨҪТӘМӘ ЭШ ӨСӨН ТҮЛӘҮ

**Мин хеҙмәт иткән ойошмала арттырып эшләгән өсөн түләмәйҙәр, ә өҫтәлмә ял бирәләр. Ләкин шул уҡ ваҡытта етәксе теләгән ваҡытта ялдан саҡырып алырға мөмкин. Ул хаҡлымы?**

- Закон арттырып эшләгәнде өҫтәмә ял ваҡыты менән компенсациялауҙы рөхсәт итә. Ләкин ул хеҙмәткәрҙең теләге буйынса ғына башҡарылырға мөмкин. Әгәр ҙә ул арттырып эшләгән өсөн аҡса алырға теләй икән, эш биреүсе уның хеҙмәтен юғары түләү менән - тәүге ике сәғәтте бер ярым, ә ҡалған сәғәттәрҙе икеләтә күләмдә - компенсацияларға тейеш. Ике яҡтың килешеүе нигеҙендә бындай эш өсөн өҫтәмә ял бирелә икән, етәкселек эшкә саҡырып сығарырға хоҡуҡһыҙ.

### ПЕНСИЯНЫ НИСЕК КҮСЕРЕРГӘ?

**Мин 2001 йылдан хаҡлы ялдамын. Күптән түгел ҡатыным вафат булды һәм мин йәшәү өсөн ҡыҙым янына икенсе төбәккә күсергә ниәтләнәм. Ошоға бәйле пенсия алыу менән бәйле мәсьәлә килеп тыумаҫмы, тип борсолам. Уны нисек итеп күсерергә мөмкин?**

- Рәсәй биләмәһендә йәшәү урынын үҙгәрткән осраҡта, законға ярашлы, пенсия эше граждандың йәшәү урынына күсерелә. Бының өсөн яңы йәшәү урыны буйынса Пенсия фондына мөрәжәғәт итергә кәрәк. Унда Башҡортостандан пенсия эшен ебәреүгә запрос эшләүҙе һәм уны иҫәпкә ҡуйыуҙы һорап, ике ғариза яҙыла. Ғаризаларҙа йәшәйәсәк фактик адресты күрһәтергә кәрәк. Шулай уҡ пенсияны ниндәй юл менән алыуҙы ла хәл итеү мөһим. Бының өсөн почта хеҙмәте менән ҡулланырға йәки аҡсаны банк карточкаһына күсереү юлын һайларға мөмкин. Әгәр ҙә кире Башҡортостанға ҡайтырға булһағыҙ, ошо уҡ схема буйынса пенсияғыҙҙы кире күсерә алаһығыҙ.

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Йүтәл

❖ Кәбеҫтә япрағын 1 минутҡа ҡайнап торған һыуға тығып алырға, бал һыларға һәм йылы көйөнә күкрәккә һалып, бәйләргә. Әгәр ҙә йүтәл ныҡ көслө икән, арҡаға тағы бер япраҡ һалырға. Был бигерәк тә балаларҙы дауалау өсөн ҡулайлы. Төнгөлөккә эшләһәң, файҙаһы күберәк. Ҡайһы берҙә 1-2 көн дауаланыу ҙа хатта оҙайлы ҡурылдайҙы ла юҡҡа сығара.

### Холецистит

❖ Көн һайын 1 стакан грейпфрут һуты эсергә.

❖ Ҡара торма һутына шул уҡ күләмдә бал өҫтәргә һәм көнөнә бер тапҡыр стакандың өстән бер өлөшө күләмендә эсергә.

❖ Миләште сәй итеп эсеү яҡшы һөҙөмтә бирә. Уны көнөнә 1-2 тапҡыр яртышар стакан эсергә кәрәк. Дауалаыу өсөн консерваланған миләш ҡулланырға ла ярай.

❖ Көн һайын йәшел сәй эсеү шешеүҙе баҫа һәм үт ҡыуығында таштар барлыҡҡа килеүҙән һаҡлай. 1 ҡалаҡ сәйгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, һөҙөргә һәм эсергә. Һөт өҫтәргә лә мөмкин.

### Варикоз

❖ Ҡыҙыл күсәнле кәбеҫтәнең бер нисә япрағын яҡшылап йомшартып, ауыртҡан урындарға һалырға һәм ныҡ тығыҙ итмәй генә бәйләргә. Кәрәк булған һайын япраҡтарҙы алыштырып торорға. Төнгөлөккә компресс эшләү кәңәш ителмәй, сөнки ул ҡан йөрөшөн насарайтасаҡ, был иһә сирҙе тағы ла көсәйтеп ебәреүе ихтимал.

❖ Варикоздан каланхоэ төнәтмәһе лә файҙалы. Ярты литрлы һауыттың яртыһына тиклем каланхоэ япраҡтарын тултырырға һәм өҫтөнә 70 процентлы спирт ҡойорға. Бер аҙнаға ҡараңғы урында торорға. Кис һайын ошо төнәтмәне табандарҙан башлап тубыҡҡа ҡарай ипләп кенә һөртөргә (ыуырға ярамай!). Бер нисә тапҡыр ҡулланғандан һуң, һыҙланмай башлаһығыҙ, әммә дауаны 4 ай тирәһе дауам итергә кәрәк.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# АЙЫУ...

## әҙәми заттан

**Башҡорт мифологияһында айыу культы үҫеше менән бәйле сюжеттар ҙа күп. Аймаҡ, аралар "айыу" этнонимдарын йөрөтә. Мәҫәлән, бөрйән, ҡыпсаҡ, үҫәргән ырыуҙарында "Айыу" аймағы бар. Ошондай уҡ атама түңгәүер, тамъян, ғәйнә, әйле, шайтан-көҙәй, ҡоҙғон-ҡатай, күбәләк-табындарҙа ла осрай. Улар барыһы ла нәҫелдәренең айыуҙан килеп сығыуы тураһында һөйләй.**

Бөрйәндәрҙең "Айыу араһы" килеп сығыуы тураһында түбәндәге легенданы һөйләгәйнеләр. Бер һунарсы урмандан айыу балаһы алып ҡайта, ул кешесә һөйләшеп китә, йәғни, ул кеше-айыу булып сыға. Үҫкәс, уны өйләндерергә булалар һәм баһадир кәүҙәле бер ҡыҙҙы һоратала. Уларҙың нәҫеле "Айыу араһы" тип йөрөтөлә башлай. Ошондай уҡ тарих башҡа ырыу-араларҙа ла бар. Был аралар йышыраҡ "Айыу араһы", "Айыу һеңрәне" тип йөрөтөлә.

Яңы тыуған баланы мунса индергәндә яуыз күҙҙәрҙән һаҡлау өсөн түбәндәгесә һамаҡлағандар:

*"Минең балам түгел әле,*
*Айыу, бүре балаһы!"*

Йәки:

*"Айыу балаһы сабам,*
*Бүре балаһы сабам".*

Йәнәһе, был кеше балаһы түгел, айыу балаһы, шуға ла ышанған яуыз көстәр уға теймәйәсәк.

Айыу шул уҡ кеше, тик икенсе сүрәттә, тигән ҡараш "Урал батыр" эпосының әкиәт вариантында яҡшы күренә. Төп персонаждарҙың береһе Шүлгән атаһының тыйыуына ҡарамаҫтан, юхаының кәңәше буйынса йыртҡыс ҡаны эсеп ҡарай һәм шунда уҡ айыуға әүерелә. Айыу - сығышы менән кеше затынан тигән фекер башҡа йола һәм ышаныуҙарҙа ла сағыла. Мәҫәлән, күпте күргән Бөрйән һунарсылары раҫлауынса, үлтерелгән айыуҙың тиреһен тунап, кәүҙәне арҡаһына һалһаң, ул - ҡатын-ҡыҙға, ә эсенә һалһаң, ир-егеттең кәүҙәһенә оҡшап ята. Айыуға һунарға шым ғына йыйыналар, һунар мәлендә айыуға "айыу" тип түгел, ә "лап-лоп", "алпан-толпан" (уның атлап йөрөүенә оҡшатып), "думбай" (кәүҙәһен саҡ ҡыбырлатып йөрөүенә ишаралап), "урман эйәһе", "урман ҡото", "олатай", "алып" тип өндәшәләр. Һунарға барған юл менән ҡайтмайҙар, әгәр ҙә һунар уңышлы булһа, кеше күҙенә салынмаҫҡа тырышалар. Бында үлтерелгән айыуҙың йәне һунарсыға берәй зыян килтермәһен, тигән теләк ята.

Борон айыуҙың итен ашауҙы ла тыйғандар. Бөрйән һәм Хәйбулла райондарында йәшәүселәр әйтеүенсә, айыу итен ашарға ярамай, сөнки ул әҙәми заттан. Был ышаныу Әбйәлил башҡорттарында ла бар. "Айыу олатай" легендаһына буйынса, "Айыу" араһына ҡараған кеше айыуға һунар итергә лә, уның итен ашарға ла тейеш түгел. Башҡа нәҫелдән булған һунарсылар иһә һунар алдынан айыуға шулай тип өндәшкән: "Айыу олатай, балаларым ас интегә, бер ғәйебе булмаған, йола тотмаған, зат-ырыуҙы уларға тәмләргә рөхсәт ит".

**Ф. Илембәтов, А. Илембәтова.**
**"Башҡорт мифтары һәм йолаларында хайуандар культы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ШАҢДАУ

# СҮПЛӘМӘГӘН УРЫНДА ТАҘА...



**"Киске Өфө"нөң былтырғы 47-се һанында "Йыл да ҡабатлана торған хәлдәр" тигән мәҡәлә баҫылып сыҡҡайны. Уны уҡып сыҡҡас, әллә беҙҙең ауылдағы хәлдәрҙе яҙғанмы был автор, тип уйлап ҡуйҙым. Ҡабатлағандан доға иҫкермәй, уҡымай тороп ҡалғандар иғтибарына ҡабатлайыҡ әле шул сығышты.**



"Ауыл халҡының дөйөм йыйылышы бара, - тип яҙа автор. - Беҙҙә уны, сход, тиҙәр. Барыһы ла ҡыҙыпҡыҙып тәртипһеҙлектәр, етешһеҙлектәр тураһында һөйләй. Бер-береһенең тетмәләрен тетәләр генә. Сүпсарҙы ярамаған урында түгеүселәр, малдарын көтөүгә йөрөтмәүселәр, йәиһә һуң ҡыуыусылар, ауыл тирәһен ағас-таш менән тултырып ҡыйлаусылар, урамды иҙгесләп үтеүсе тракторсылар, шоферҙар, йоҡосо көтөүсе, ялҡау һәм шамтыр һатыусы, әхлаҡһыҙ уҡытыусы, намыҫһыҙ етәксе, һәләтһеҙ мәҙәниәт эшмәкәре - барыһы-барыһы ла "кәрәгенә" ала бында. Хатта үгеҙ булмағанлыҡтан ҡыҫыр ҡалған һыйырҙар ҙа, йылдың-йылы ярын ашап, ауылға яҡынлашҡан йылға ла онотолмай. Бөтәһе лә хаҡ һөйләй, бер-береһенең күҙенә бәреп дөрөҫлөктө әйтә.

Йыйын тамам. Ярһыған ағай-эне һаман тыныслана алмай. Таралышҡан мәлдә лә бәхәсләшеп, һүҙ көрәштереп мәж киләләр. Ошонан һуң байтаҡ ваҡыт үтә. Ярамаған урындарҙа, унда ла, бында ла сүп өйөмдәре хасил була, аты ла, һыйыры ла, кәзә-һарығы ла урам тулып, баҫыу тапап, көтөү-көтөү булып ҡарауһыҙ йөрөй, сабынлыҡтарҙы, сәсеүлектәрҙе тәләфләй. Шәхси йорт тирәләре, кәртә арттары ағас-таш менән тула, урамды иҙгесләп, әле был яҡҡа, әле икенсе яҡҡа күп тонналы тракторы ла, елле генә машинаһы ла үтеп китә. Ҡоро көндәрҙә саң-туҙандан күҙҙе асырмын, тимә. Көтөүсе эҫе төшкәнсе йоҡлап ята, һатыусы төш етеп килгәндә генә кибетен аса, мәҙәниәт үҙәге һаман, киләһе йыйынға тиклем, бикле тора, әхлаҡһыҙ мөғәллим һуҡмыш йөрөй, намыҫһыҙ етәксе һаман йәмәғәт малына ҡул һуҙа, һыйырҙар ҡыҫыр ҡала, ныҡыш йылға йомшаҡ ярын өңөп ашауын дауам итә. Иң ҡыҙығы шунда: теге йыйында барыһынан да күберәк һөйләгәндәр барыһынан да күберәк тәртип боҙа. Ошолай йыл да ҡабатланып тора..."

Бындай хәлдәр беҙҙә лә, башҡа ауылдарҙа ла ҡабатланып тора. Яҙ һайын, малды көтөүгә ҡыуыр алдынан беҙ ҙә ауылыбыҙҙа сход үткәрәбеҙ. Һәр йыл ошо йыйылышта, еребеҙҙе сүп-сар менән тултырҙыҡ бит инде, тип сығыш яһайым. Ауылдаштарымдың һәр береһе бының менән килешә, теләктәшлек белдерә, ләкин... Ауылыбыҙ тирә-яғындағы ҡый бер ҙә кәмемәй, ә арта ғына бара.

Ғәҙәттә, май байрамдары алдынан һәр ғаилә үҙенең ихатаһын, йорт алды территорияһын һепереп, таҙартып ҡуя. Был юлы ла ауылда шундай эштәр атҡарылды, урамдар бер аҙ сүп-сарҙан арынды. Минең күрше шәхси магазин тота. Бына бер көндө йәш кенә ҡатын 3-4 йәшлек балаһы менән магазиндан килеп сыҡты ла, ҡулындағы ашамлыҡтың төргәген ергә бырғаны. Эргәһендә торған балаһы ла шуны уҡ ҡабатланы. Мин, был хәлдең шаһиты, йәш ҡатынға иҫкәрмә яһаным: "Ҡыҙым, күршем бөгөн генә иртәнсәк магазины алдын матурлап һепереп ҡуйғайны, ә һин ҡыйлап тораһың", - тинем. Ҡатын бер һүҙ ҙә әйтмәне, миңә күҙен аҡырайтып ҡараны ла, балаһын ҡулынан һөйрәкләп тигәндәй алып китеп барҙы. Балаһы бер нисә тапҡыр артына әйләнеп ҡараны, ниҙер әйтте, ләкин әсәһе уны һөйрәкләүгән белде. Бала: "Әйҙә, әсәй, ташлап киткән сүп-сарҙы барып алайыҡ", - тип әйткән төҫлө лә тойолдо миңә...

Шул уҡ көндө кис кәртә артына бәйләп ҡуйған һауын кәзәбеҙҙе алырға төштөм. Ауылдашыбыҙ ат арбаһына тейәгән бер йөк ҡыйҙы юл эргәһенә ауҙарып тора (өс бала атаһы). Мин аптырап: "Улым, ниңә ҡыйынды бында түгәһең, бының өсөн махсус урын бар ҙабаһа", - тигәйнем, ул миңә: "Миңә иҫкәрмә яһарға һин кем ул хәтлем?.." - тип ҡырт киҫте лә, арбаһына ултырып, китеп тә барҙы. "Мин оло кеше", - тиеүҙән башҡа һүҙ тапманым...

Бына ошондай хәлдәр күп ауылдарҙа һәм... ҡалаларҙа ла күҙәтелә. Үҙебеҙ йәшәгән мөхитте үҙебеҙ быҫратабыҙ ҙа, шул хәлгә әй зарланған булабыҙ. Етмәһә, сит илдәргә барып йөрөп ҡайтҡандан һуң: "Унда ҡалай таҙа йәшәйҙәр, бер ерҙә лә сүп-сар күрмәҫһең", - тип фекер уртаҡлашып, гәзиттәргә яҙа, телевидениенан һөйләгән була кемдәрҙер. Ә мин уларға ышанмайым. Сөнки ошо кемдәрҙер ҡулындағы транспорт билетын, тәмәке төпсөгөн булһа ла барыбер ташлап китә торғандыр әле урамға...

**Ҡасим ЯНБАЕВ.**
**Ейәнсура районы.**

# ҺИНМЕ ӘЛЛӘ ҺЕҘМЕ?



**Әкрәм Ҡәйепҡоловтың гәзитебеҙҙең былтырғы 43-сө һанында баҫылған "Бер кешегә һин таман, шуны белмәйбеҙ һаман..." тип аталған мәҡәләһенә ҡарата ниңәлер бер кем дә үҙ фекерен белдермәне, яҙманы. Әллә "Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ..." тип тынып ҡалдылармы? Ә мин уйланып йөрөнөм-йөрөнөм дә, фекеремде яҙып ебәрергә булдым.**

"Һеҙ" тип өндәшкән ваҡытта кешенең атаһының исемен дә ҡушып әйтеү ғәҙәте беҙҙең һөйләшкә ҡасан килеп ингәндер - белеп булмай. Ул турала тарихсыларҙан йә филологтарҙан һорарға кәрәктер. Ә әлеге заманда тота һалып ят кешегә (ул һинән кесе йәштә булһа ла) "һин" тип өндәшеп ҡара! "Что это вы мне тыкаете?" тигән тупаҫ һүҙ ишетеүеңде көт тә тор! Бик күптән әҙәплелек кимәлен билдәләүсе һүҙҙәрҙең береһенә әйләнгән "һеҙ" һүҙен ҡапыл ғына "һин"гә әйләндереп булырмы икән?

Һөнәрем буйынса керамика рәссамымын һәм беҙҙең телдә "кире ҡайтарылғыһыҙ реакция" тигән термин бар. "Һеҙ"ҙе "һин"гә әйләндереүҙе лә ошондай уҡ реакция тип атар инем. Балсыҡты 700-1000 градуслыҡ эҫе температурала яндырғас, бынан һуң уны тәүге һығылмалы хәленә бер нисек тә ҡайтарып булмай. Керамика шул яғы менән археологтарға ярҙам итә лә инде. Тимер - тутыға, келәмдәр - серей, ә балсыҡ һауыт, ватылһа ла, уны йыйып, киренән йәбештереп була. Ғәҙәттә, боронғо балсыҡ һауыттарҙың эшләнеү ваҡытын белгестәр һүрәттәренән сығып билдәләй. Әгәр һүрәттәр оҫта итеп төшөрөлгән икән - беҙгә яҡыныраҡ быуатҡа ҡарай, тиҙәр. Әгәр һауытҡа ябай һыҙыҡтар, нөктәләрҙән генә торған һүрәттәр төшөрөлгән булһа, тәүгеләренән боронғораҡ һауытҡа юлыҡҡандар, тигән һүҙ. "Һин" тип өндәшеү, ысынлап та, боронғораҡтыр ҙа, тик "һеҙ" тип өндәшеүҙе лә ялағайлыҡ билдәһе тип ғәйепләүҙе мин дөрөҫ фекер тип тапмайым. Даими рәүештә берәй закон ҡабул ителһә, уның үтәлеше контролдә тотолһа, бер-беренә "һин" тип өндәшеүгә күсеп булыр һымаҡ та ул...

Бер бала саҡ иҫтәлеген дә яҙып үтәйем әле. 4-5 синыфта уҡып йөрөгәндә булды ул хәл. Тәрбиәсе Мәрхәбә апай йәйҙең бер көнөндә беҙ йәшәгән дачаға ҡыҙын алып килде. Зөһрә (ҡыҙы) беҙҙән кесерәк йәштә. Ҡыҙының әсәһенә "һин" тип өндәшеүен ишетеп: "Оло кешегә "һеҙ" тип өндәшеү дөрөҫ булыр", - тинем. Минең был һүҙҙәремде ишетеп, апай: "Әсә балаға иң ҡәҙерле кеше, шул сәбәпле әсәйгә "һин" тип өндәшеү дөрөҫ була", - тип, мине тәнҡитләп алды. Хәйер, беҙҙең әсәйҙәребеҙ юҡ ине бит. Әхирәтем Факиһаның, бышылдап ҡына: "Ә минең әсәйем булһа, "һеҙ" тип, ололап, ҡәҙерләп кенә өндәшер инем", - тип, мине яҡлап, тынысландырып ҡуйыуы ла аңлашыла торғандыр...

**Айгөл АХУНОВА.**

✓ *Монгол улысының күп ҡағандары, шулай уҡ Ирандың ил башлыҡтары яртылаш кәрәит була. Монголстандың иң билдәле династияһы менән туғанлашырға теләгән Сыңғыҙхан, ниһайәт, үҙенең моратына өлгәшә.*



*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

**Тарих фәндәре кандидаты, Башҡортостан юлдаш телеканалының билдәле журналисы Салауат ХӘМИҘУЛЛИНдың "Башҡорт ырыуҙары тарихы" серияһы, халҡыбыҙ тарихының ҡайһы бер биттәре тураһындағы яҙмаларын дауам итәбеҙ.**

# ҠАН БУЙЫНСА БАШҠОРТТАР...

## тамырҙарын иҫкә төшөрһөн

### Гәрәй ырыуы. Кәрәиттәр

Гәрәй ырыуының тамырҙары, тикшеренеүселәр фекере буйынса, кәрәит тип аталған ҡәбиләгә барып тоташа. Кәрәит монгол теленән "ҡоҙғондар" тип тәржемә ителә.

XVI быуатта йәшәгән фарсы тарихсыһы Рәшид әд-Дин фекеренсә, "...улар монгол ырыуын тәшкил итәләр, уларҙың йәшәгән урындары Онон һәм Кәрулен йылғалары буйында, монгол ерҙәрендә. Уларҙың ерҙәре Ҡытай сиктәренә яҡын". Был сығанаҡтан ғына сығып, гәрәйҙәрҙең тарихы тулыһынса монголдарға барып тоташа, тип фекерләү дөрөҫ булмаҫ ине, әммә был ырыуҙың килеп сығыуында төрки компонентының да булыуын әйтергә кәрәк. Беренсенән, Рәшид әд-Дин тел мәсьәләһендә монголдар менән төркиҙәрҙе айырмаған. Икенсенән, ул Монгол иленең ҡәбиләләрен ике төркөмгә, дәрләкин монголдарға һәм нирун монголдарға бүлеп, кәрәиттәрҙе ошо ике төркөмдөң береһенә лә индермәгән. Өсөнсөнән, тәүге сығанаҡтарҙан күренеүенсә, кәрәиттәр менән монголдарҙың бәйләнеше төҫмөрләнмәй. Етмәһә, был ырыу вәкилдәренең титулдар һәм исемдәре төркисә яңғырай (мәҫәлән, Бойороҡ хан, Тоғрул хан). Монголстандың, найман һәм онгуттарҙан тыш, башҡа ҡәбиләләрендә бындай атамалар булмай. Билдәле монгол белгесе Л.Л. Викторова бушҡа ғына "кәрәиттәр төрки-уйғур менән кидан-монгол компоненттарынан торған ҡатнаш составҡа эйә була", тип яҙмағандыр.

Кәрәит ҡәбиләһенең тарихы бик тәрән, мауыҡтырғыс ваҡиғаларға бай була. Бөтә өлөшөнә лә туҡталып тормайынса, шуны ғына әйтергә ҡала: тап ошо ҡәбиләнең һуңғы ханлығы башлығы Ванхан (ысын исеме Тоғрул хан) Сыңғыҙхан менән берлектә татар, мәркәит, найман, тайджиут һәм башҡа күп ҡәбиләләрҙе ҡыйратып, Монголстандың хужаларына әйләнә. Заманында ата-бабаларына күп ғазаптар килтергән татар ҡәбиләһе улар тарафынан тулыһынса юҡҡа сығарыла. Е. И. Кычанов яҙыуынса, бер нисә тиҫтә йылдан һуң Сыңғыҙхан ғәскәрҙәре Көнбайышта йәшәгән халыҡтарға һәм илдәргә ҡаршы ҙур яу башлай. Яуланған халыҡтар уларҙы "татарҙар килә" тип ҡурҡып ҡаршы алһа ла, яу менән килеүселәр араһында татарҙар бик аҙ була, бары тик уларҙың дәһшәтле исеме генә һаҡланып ҡала. Шулай итеп, татарҙар тулыһынса тиерлек юҡҡа сыҡһа ла, уларҙың атамалары артабан да йәшәй. Лев Гумилев әйтеүенсә, халыҡтың исеме комуфляжға әйләнә.




Татарҙарҙы тар-мар итеү Үҙәк Азия тарихында һынылыш ваҡиға була. В.В. Бартольд яҙыуынса, татарҙарҙы еңеү кәрәит ханын Көнсығыш Монголияла төп башлыҡ итә. Әммә унын беренселеге шартлы рәүештә генә була, сөнки был ваҡытта Сыңғыҙхандың абруйы артҡандан-арта бара. Бәлки, Ванхан, башҡа хандар кеүек, Сыңғыҙхандың өҫтөнлөгөн танһа, унын яҙмышы ла башҡасараҡ булыр, үҙенә һәм улдарына Бөйөк Монгол иленең етәкселегендә урын табылыр ине Ләкин тарих башҡаса боролош ала.

Тарихи сығанаҡтарҙан күренеүенсә, Сыңғыҙхан һәр саҡ кәрәиттәрҙең хан династияһы менән туғанлашырға тырыша. Бер ваҡыт ул үҙенең улы Джучиға Ванхандың ҡыҙы Саурбикәнең ҡулын һорай һәм үҙенең туғаны Хочжинбикәне Ванхандың ейәне Тусахеға тәҡдим итә. Әммә кәрәит ханының улы Сангун, үҙ нәҫеленең зыялылығы менән тәкәбберләнеп, Сыңғыҙхандың нәҫелен кәмһетергә тотона. Был һөйләшеүҙән һуң Сыңғыҙхан Ванханға һәм уның улына һыуына. Был турала әле генә Сыңғыҙхан менән Ванханға ҡаршы тупланған һәм тәүгеләр тарафынан тар-мар ителгән союздың гурханы булған Джамуха белеп ҡала. Ул, Сангун менән осрашып, хан улын Сыңғыҙханға ҡаршы көйләй һәм улар Ванханды үҙ яғына ауҙарыу эшен башлайҙар. Ҡарт хан, үҙенең улы кеүек күреп йөрөгән вассалы - Сыңғыҙханға ҡаршы сығырға теләмәй, ләкин улының ныҡышмалығына күнергә мәжбүр була.

Килеп сыҡҡан аңлашылмаусанлыҡтар ике хан араһындағы һуғышҡа алып килә. Тәүҙә кәрәиттәр еңеп килһә лә, Сыңғыҙхандың хәрби оҫталығы һәм мәкерлеге үҙе ҡасандыр "атай" тип йөрөткән кешеһенең дәүләтенең ҡыйралыуына килтерә. Яу барышында ул илселәре аша Ванхандан: "Минең ниндәй ғәйептәрем өсөн һин асыуландың, ханым һәм атайым?",- тип һорай. Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, Торғулдың йөрәге елкенеп китә: "Һәләк булырға минә! Улымды ғына оноттоммо мин? Дөрөҫлөк ҡанунын оноттом..." - ти. Сыңғыҙхан үҙен Ванхандың улы һәм вассалы тип атап, тәүгеһенең иғтибарын ситкә алып китә. Һуңынан ҡарт хан, еңдем, тип уйлап, алтын тирмәһендә күңел асҡанда, көтмәгәндә һөжүм яһап, кәрәит ханлығын һәләкәткә килтерә. Ванхан илен ҡалдырып ҡасырға мәжбүр була һәм Найман дәүләте сиктәрен үткәндә ҡарауыл тарафынан үлтерелә.

Шулай итеп, күктә бер ҡояш ҡына булған кеүек, ерҙә лә бер генә хаким булырға тейеш. Был ғибрәтле тарих баштан уҡ Сыңғыҙхан менән Ванхан араһындағы сәйәси тандемдың дауамлы буласағына шик тыуҙыра. Асылында ошо ике хандың береһен һайлау Монголстандың киләсәк юлын һайлау була. Бар оло йәштәге монгол зыялылары ныҡы кеүек үк, Ванхандың идеалы, элекке ырыу төҙөлөшөн һаҡлап, күрше дәүләттәр менән ошо ерлектә йәшәү була. Сыңғыҙхан һәм уның тарафташтары иһә, "ҙур ихтыяр кешеләре", элекке традицияны өҙөп, аттарға һыбайланып, бар донъя менән хакимлыҡ итергә хыяллана.

Тарихсылар фекеренсә, Ванханды тар-мар итеү Сыңғыҙхандың иң оло еңеүҙәренең береһе була. Бының менән уға башҡа дәүләттәрҙе яулау өсөн һуңғы кәртәләр юҡҡа сыға. Ә кәрәиттәр ҡәбиләһе менән нимә була һуң? Татарҙарҙан айырмалы рәүештә, уларҙы тулыһынса юҡ итмәйҙәр, ә дәүләттең төрлө ерҙәренә күсереп ултырталар. Сыңғыҙхан менән аңлашылмаусылыҡ сәбәпселәренең береһе булған Ванхандың улы Сангун Си Ся ерҙәренә ҡаса, ләкин тангут властары уны үҙ ерҙәренән ҡыуып ебәрә. Һуңынан ул Көнсығыш Төркөстанға китә, унда уйғыр хакимы Ҡылысҡара тарафынан үлтерелә. Был ханлыҡ Сыңғыҙхан хакимлығына күскәс, Ҡылысҡара Сангундың ҡатыны һәм улын дәүләттәр падишаһына бирә. Ҡыйралған кәрәит династияһы ханбикәләренең яҙмышы башҡа була. Ванхандың бер туған ағаһы Джакамбуның ҡыҙы Әбикәне Сыңғыҙхан үҙенә кәләш итеп ала. Уның ҡарындашы Биктутмышты үҙенең улы Джучиға кәләш итеп алып бирә, кесе улы Тулуйҙы Джакамбаның өсөнсө ҡыҙы Соркуктаниға өйләндерә. Соркуктани дүрт монгол ханы - Менгехан, Хубиләй ҡаған, Хулагухан, Ариг-Бугиҙың әсәһе була. Бынан тыш, Ванхандың ейәнсәре Дуғуҙ хатунды Хулагухан оло ҡатынлыҡҡа ала, ә икенсе ейәнсәре Урук хатунды Сыңғыҙхандың туғаны Аргун ханға кейәүгә бирәләр. Күреүебеҙсә, Монгол улысының күп ҡағандары, шулай уҡ Ирандың ил башлыҡтары яртылаш кәрәит, йәки уларҙың кәләштәре кәрәит ҡәбиләһенән сыҡҡан була. Монголстандың иң билдәле династияһы менән туғанлашырға теләгән Сыңғыҙхан, ниһайәт, үҙенең моратына өлгәшә.

**Азамат САЛАУАТОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Сәнғәт һәм фольклор

Йәш кәләш исеменән ҡоҙасалар һарауысты туғандарына һәм абруйлы ҡунаҡтарға бүләк итә, улары үҙ сиратында аҡса бирә. Борон һарауыстар ҡоҙалар килгән ваҡытта ла роль уйнаған, ҡоҙасалар буласаҡ килендең оҫталығын дәлилләп, уны буласаҡ кейәүҙең туғандарына күрһәткән. Шулай уҡ бәпес тапҡан ҡатынды күрә килеүсе ҡатын-ҡыҙға ла һарауыстар бирелгән.

Музей өсөн этнографик коллекция йыйғанда мөмкин булған һәр ерҙә һарауыс алырға тырыштым, сөнки улар йылдан-йыл бөтөп бара ине. Һөҙөмтәлә 200 дана самаһы һарауыстан коллекция тупланым, уларҙың 124-е Өфө ҡалаһы музейҙарында һаҡлана.

Шыма сигеү киндер ептәре иҫәбенә башҡарыла. Тәүҙә ҡара еп менән һүрәттең контуры сигелә, һуңынан ҡалған майҙан төрлө төҫлө ептәр менән тултырыла. Был ептәр, нигеҙҙә, ебәктән була.

Һарауыстан башҡа башҡорт ҡатын-ҡыҙы таҫтамал остарын да сигә (ҡайһы бер осраҡта был таҫтамалдар башҡа уралған таҫтарбаш булып хеҙмәт итә). Уларҙың осона селтәр тегелә, суҡтар ҡуйыла.

Һарауыстарға ҡарағанда, уларҙың биҙәктәре күп төрлө мотивтарҙан торған кеүек. Ентекләп күҙ һалғанда инде ҡабатланған төп элементтарҙы һәм уларҙың варианттарын айырырға мөмкин. Башҡорттарҙың һарауысҡа төшөрөлгән орнаменттарын ентекле



өйрәнгәндә уларҙың төп биҙәктәрен айырырға була (**һүрәттәр**).

Был һүрәттәрҙә биҙәктәр геометрик характерҙа, әммә ҡайһы берҙәрендә зооморф характерҙағылары ла осрай.

Ҡабартмалы (тамбур) һәм төйөнлө сигеү менән башҡарылған күкрәксә һәм түшелдерек, намаҙлыҡ, таҫтамал, һөлгөләр, һаба йәки силәк ябыуҙары һ.б. айырым урын алып тора. Был предметтарҙа биҙәк сигеү өсөн тәүҙә тамбур сигеүе менән контур эшләнелә, һуңынан биҙәк сигелә. Йөн еп менән сиккәндә биҙәктең контуры тамбур сигеүе менән эшләнелә, ә һүрәтте ҡаплаусы элмәктәр бер-береһенә яҡын булып, ҡабартма биҙәк яһай. Бындай биҙәктәр һәр саҡ ирекле һәм бер яҡ ярты икенсе яҡтың яртыһына көҙгөләге сағылышы кеүек оҡшаш була. Төҫтәр сағыу, сыбар һәм төрлө.

Һөлгө һәм балаҫтарҙың ситендә осраған геометрик орнаменттар туҡыу станогында төрлө төҫлө ептәрҙе аралаштырып башҡарыла (**һүрәт**).



✓ *Халҡыңды Рәми Ғарипов һымаҡ яратырға кәрәктер ул. Һәр кемебеҙ йөрәгендә ошо тойғоно йөрөтһә, бөгөн башҡорт халҡы бөтөн донъяға билдәле булыр ине.*



# ХАЛҠЫМА

## башҡортса

**Мәктәп коридорҙары буйлап иң бәхетле бала саҡ йүгерә, тиҙәр. Шуға ла мәктәп йылдары һәр кешенең күңелендә матур хәтирәләр генә ҡалдыралыр ҙа, сөнки был ваҡытта беҙ ғүмеребеҙҙең иң хәстәрһеҙ осорон йәшәйбеҙ. Әммә бөгөнгө йәш әңгәмәселәрем ошо мәлдән үтә мөһим төшөнсәләргә - халҡының киләсәге өсөн яуаплылыҡҡа, йәмғиәткә кәрәкле кеше булырға өйрәнә.**

**Халҡыбыҙ борондан ирек, кешелеклелек, изгелек, ғәҙеллек идеалдары нигеҙенә ҡоролған тәрбиәгә өҫтөнлөк биргән. Милли гимназия-интернаттар баланы ошо ҡиммәттәр ярҙамында тәрбиәләүгә өлгәшә аламы? Уҡыусыларын илһөйәр, телһөйәр, рухлы итеү өсөн уҡыу йорто, унда белем биргән уҡытыусылар ниндәй булырға тейеш? Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатының юғары класс уҡыусылары Зәриә МОРАТОВА, Нәғим ШӘРИПОВ, Азат МӘҺӘҘИЕВ, Айсинә ЙОСОПОВА ошо һәм башҡа һорауҙарға яуап эҙләй.**



*Халҡыңды яратыуҙың төп билдәһе - туған телеңдә һөйләшеү ул. Әгәр мин башҡалар араһында үҙ милләтем менән ғорурланам икән, быны башҡаларға белдереүҙең төп сараһы - туған телдә һөйләшеү. Туған телеңә йырланған маҡтау йыры ла туған телдә яңғырарға тейеш. Унан һуң, милли мәҙәниәтеңде үҫтереү шулай уҡ халыҡты бар итә. Күптәр хәҙер рус, инглиз телендә йырҙар тыңларға ярата, тик улар ҙа тәбиғәте менән башҡорт булып ҡала. Шуға ла ваҡытлыса мауығыуҙарҙың телгә лә, мәҙәниәткә лә ҡурҡынысы юҡ.*

**▸ Һәр кеше өсөн үҙе белем алған уҡыу йорто яҡын була, шулай ҙа һеҙҙең тап 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатын һайлауығыҙҙың сәбәбе нимәлә?**

**Азат:** Мин башланғыс класта уҡығанда уҡ был гимназияның республикала индән-иң икәнен белә инем. Ни өсөн былай фекергә килгәнемде хәтерләмәйем хәҙер. Әммә һинең унда уҡырға теләүең - бер, бының өсөн һин үҙең дә яҡшы уҡырға, иң күркәм сифаттарға эйә булырға тейешһең, сөнки минең һымаҡтар күп, ә гимназия бераү икәнен аңлай инем. Атайым үҙе шахмат уйнарға яратҡас, мине лә өйрәткәйне. Бөтөн зиһенемде яуланы бит был уйын бер мәл, кеше тапмаһам, үҙ-үҙем менән уйнарға ла ғәҙәтләнеп алдым. Ярыштарҙа ҡатнашып, төрлө кимәлдә еңеүҙәр ҙә яуланды. Үҙем дә һиҙмәҫтән, хыялымдағы гимназияның уҡыусыһы булып киттем, сөнки артабан камиллашыу өсөн яҡшы тренер кәрәк ине. Тик аҙаҡтан шахмат уйнауҙан баш тарттым. Хәҙер бар күңелемде уҡыуға һалам. Шулай ҙа шахмат сабыр, түҙем булырға, төрлө ситуацияларҙан сығыу юлдарын эҙләргә өйрәтте. Кеше һәр ваҡыт үҫеш юлында булырға тейеш, ә был сифаттар миңә һәр ваҡыт ярҙам итә.

**Нәғим:** Бәләкәй саҡтан йырларға яратам, ынтылышымды күреп, атай-әсәйем был һәләтемде үҫтереүгә булышлыҡ итте. 2009 йылда "Сулпылар"ҙа ҡатнашып, Гран-при алғас, ойоштороусылар миңә 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатына уҡырға бар, тигән кәңәш бирҙе. Гимназияға 8-се класҡа уҡырға алалар, миңә тағы өс йыл көтөргә кәрәк. Шул саҡта атай менән әсәй тағы хәл иткес аҙым яһаны. "Әминбәк" әкиәтендәге кеүек, "Бар, балам, һөнәр ал", тип, Ғ. Әлмөхәмәтов исемендәге Республика музыка гимназия-интернатына уҡырға ебәрҙе. Ҡурайҙа, фортепианола, кларнетта уйнарға өйрәндем. Тик бер ҙә генә әртис булырға теләгем юҡ ине, шуға 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатына имтихан биреп, бында уҡырға килдем. Үҫә килә маҡсаттар үҙгәрә. Эйе, йыр менән кешеләрҙең күңелен дауаларға була, тик халҡыма икенсе өлкәлә хеҙмәт иткем килә. Унан һуң, минән башҡа ла йырсылар күп, башҡорт йырын данлаусылар булыр әле.

**Зәриә:** Өйҙә атайың менән әсәйеңдең иркә ҡыҙы булып йәшәүе рәхәт тә ул, тик киләсәккә нигеҙ мәктәп йылдарында һалына. Һағынһам да, бында белем алыуыма ныҡ шатланам. Буш ваҡытымда "Аҡйондоҙ" ансамблендә бейейем, шиғырҙар яҙам.

**Айсинә:** Зәриә дөрөҫ әйтә, бында иждад итергә бөтөн мөмкинлектәр бар. Бөрйәндә уҡығанда уҡ "Йәншишмә" гәзитенә, "Аманат" журналына яҙыша инем, бында "Интернатым - пар ҡанатым" гәзитендә ҡәләм шымартам. Миненсә, мәктәптә уҡығанда үҙеңде бөтөн яҡтан һынарға - спорт менән шөғөлләнергә, йырлап, бейеп ҡарарға кәрәк. Аҙаҡтан был теләктәргә ваҡыт булмаясаҡ, күңелдә үкенес тойғоһо ҡалмаһын. Гимназияға уҡырға килгән һәр баланың маҡсаттары бар, мөхит тә тәрбиәләй, юғарыға ынтыла башлайһың. Кемдең яҡшылар араһында насар булып йөрөгөһө килһен?..

**▸ Һеҙҙе рухи яҡтан үҫтереүсе, ҡанатландырып тороусы уҡыу йортонда уҡыйһығыҙ, башҡа мәктәптәрҙә уҡыусы тиҫтерҙәрегеҙгә ҡарағанда, һеҙгә еңелерәкме, әллә, киреһенсә, был оло яуаплылыҡмы?**

**Нәғим:** Гимназияла уҡыусы һәр баланың уйҙары, маҡсаттары халҡыбыҙҙы, туған телебеҙҙе яратыу тойғолары менән бәйләнгән, тип ышанам. Моғайын да, ҡыҫҡырып әйтмәһә лә, һәр кем өсөн Рәми Ғарипов өлгө булып торалыр. Сөнки туған тел һәм Рәми - улар хәҙер синоним һүҙҙәргә әйләнеп бөткән.

**Айсинә:** Һис шикһеҙ, яуаплылыҡ. Беҙҙе Рәми рухы, мөхит үҙе тәрбиәләй, шағир исемен йөрөткән гимназияла белем алыуы ҙур ғорурлыҡ. Шағирҙың көндәлектәрен уҡығандан һуң Рәми миңә үҙем тормошта аралашып, танып-белгән кеше кеүек яҡын. Уның тәрән уйлы, киң ҡарашлы булыуына һоҡланам. Шулай ҙа шағирҙың тормош юлынан алған төп һабаҡ шул: уның һәр нәмәгә үҙ ҡарашы булған, был ҡараш бер ҡасан да халыҡҡа ҡаршы йүнәлтелмәгән һәм ул бер ваҡытта ла үҙ фекеренән баш тартмаған, уны үҙгәртмәгән дә, тимәк, үҙен ихтирам иткән - кеше тап шулай булырға тейеш. Ныҡ икеләнеп киткән саҡтарымда, минең урынымда булһа, Рәми нимә эшләр ине, тип йыш уйлайым. Халҡыңды Рәми Ғарипов һымаҡ яратырға кәрәктер ул. Һәр кемебеҙ йөрәгендә ошо тойғоно йөрөтһә, бөгөн башҡорт халҡы бөтөн донъяға билдәле булыр ине. Әммә йышыраҡ киреһен эшләйбеҙ, хатта яуыз уйлыларҙан туған телебеҙҙе лә яҡлай алмайбыҙ.

**Азат:** Һәр мәсьәләлә лә киңерәк фекер йөрөтөү урынлы. Әгәр ҙә һинең ниндәйҙер проблемаң бар икән, бында иң тәүҙә һин үҙең ғәйепле. Телгә, башҡа милли мәсьәләләргә килгәндә лә шулай. Айсинә телебеҙҙе һаҡларға кәрәк, ти ҙә ул, тик башҡорт теленең бөгөн хәле яҡшынан түгел икән, бында беҙ, башҡорттар, ғәйепле. Етәкселәргә, башҡа милләттәргә, хатта ҡырыҫыраҡ иҫкән елгә лә япһарып була бәләләрҙе. Тик тәүҙә үҙеңде яуаплы тойоп, башыңды эшләтеп ҡарарғалыр, бәлки? Ошо тойғоға һәм берҙәмлеккә өйрәтә беҙҙе гимназия.

**Нәғим:** Бәлки, ҡайҙалыр башҡорттар кемдәндер нимәләр көтөп ултыралыр, әммә мин үҙебеҙҙе алдынғы ҡарашлылар рәтенә ҡуям, сөнки беҙ халҡыбыҙҙың киләсәген яҡшыраҡ итер өсөн тырышып белем алабыҙ, хыялланабыҙ, пландар ҡорабыҙ. Гимназия беҙҙең йөрәктәребеҙгә рух орлоҡтары сәсә. Бында уҡырға килгәндә лә мин рухлы инем, юғары үрҙәргә менерлек көсөм барлығына ышана инем. Ошо хистәрем тағы ла нығынды. Шулай ҙа кемдер һине, шулай, тегеләй бул, тип өйрәтеп ултыра тип аңларға кәрәкмәй, һин ниндәй сифаттарың менән Башҡортостанына кәрәкле кеше буласағыңды үҙең тоҫмаллап, һығымталар яһарға бурыслыһың.

**▸ Әңгәмәбеҙҙә йыш ҡабатланған "халҡымды яратыу" тигән төшөнсәгә нимә һалаһығыҙ? Ундай кеше ниндәй сифаттарға эйә була?**

**Айсинә:** Халҡың менән ғорурланыу һәм үҙеңдең тормошоңдо уға бағышлау күҙаллана был төшөнсәлә, тип уйлайым.

**Зәриә:** Халҡыңды яратыуҙың төп билдәһе - туған телеңдә һөйләшеү ул. Әгәр мин башҡалар араһында үҙ милләтем менән ғорурланам икән, быны башҡаларға белдереүҙең төп сараһы - туған телдә һөйләшеү. Туған телеңә йырланған маҡтау йыры ла туған телдә яңғырарға тейеш. Унан һуң, милли мәҙәниәтеңде үҫтереү шулай уҡ халыҡты бар итә. Күптәр хәҙер рус, инглиз телендә йырҙар тыңларға ярата, тик улар ҙа тәбиғәте менән башҡорт булып ҡала. Шуға ла ваҡытлыса мауығыуҙарҙың телгә лә, мәҙәниәткә лә ҡурҡынысы юҡ.

**Нәғим:** Халҡың булмаһа, һин кеше түгелһең, тип, Рәми Ғарипов лайыҡлы билдәләгән. Ҡыҙҙар менән килешәм, тел - милләттең һаҡсыһы. Гимназияла үҙ-ара аралашыу башҡорт телендә бара. Шуныһы ҡыҙыҡ, ҡыҙҙар русса ла һөйләшеп ташлай, әммә күреп йөрөүемсә, егеттәр тик башҡортса ғына аралаша. Ниндәйҙер сәбәп менән телде белмәгәндәрҙә тиҙ генә өйрәтеп алабыҙ.

**Азат:** Улай ғына ла түгел, төрлө райондарҙан йыйылған егеттәр менән бергә йәшәй торғас, башҡорт теленең диалекттарын белеп бөттөк. Мин Ейәнсура егете, мәсетлеләрҙе башта аңламай бер була инем, хәҙер өйрәндем инде.

**Нәғим:** Һуғыша яҙып, бәхәсләшеп киткән саҡтар ҙа була ине әле! Бер ваҡыт мин "изелгән" тигән һүҙ дөрөҫ була, тием, иптәшем "изылған" тип ныҡыша. Ярай, икеһе лә булһын башҡорт телендә, бынан ул байыраҡ ҡына була, тип килештек һуңынан...

**▸ Бөгөн йәштәр генә түгел, өлкәндәр ҙә интернет киңлектәрендә виртуаль аралашыуға күп ваҡытын бүлә. Ә һеҙ унда ниндәй телдә аралашаһығыҙ?**

**Нәғим:** Ә беләһегеҙме, беҙ ата-әсәләр һәм уҡытыусыларыбыҙҙың тәҡдимен хуплап, уҡыған саҡта бик ныҡ ҡамасау итеүсе интернеттан баш тартып торорға булдыҡ. Хәҙер беҙҙә текә телефондар юҡ, туған йорт менән бәйләнештә булыр өсөн кеҫәбеҙҙә иң ябай телефон йөрөтәбеҙ. Беҙ шундай быуын, бәләкәй саҡтан уҡ компьютер, заманса технологиялар ҡулланып үҫкәнбеҙ. Телефонһыҙ бер көн дә йәшәй

✓ *Гимназия - ул ҙур бер ғаилә кеүек. Әлеге мәлдә хатта БДИ түгел, ә дуҫтар менән айырылышыуҙы уйлау күпкә ауырыраҡ. Ошо йылылыҡты һәр башҡорт балаһы татып ҡарарға тырышырға тейеш.*



алмайымдыр ул, тип уйлай торғайным, йәшәп була икән. Кеҫәлә телефон ятһа, уны сығарып ҡарағы килә, сығарһаң инде, башкөлләй уға сумаһың да ҡуяһың. Хәҙер тыныс, иғтибарҙы ситкә йүнәлтеүсе әйбер юҡ. Был сара БДИ тапшырғанда телефонға ышаныу мөмкинлеге тураһындағы уйҙарҙан да һаҡлай.

**Азат:** Үҙеңдең ихтыяр көсөң ныҡ булһа, телефондың зыяны юҡ та, тик был тәжрибә лә үҙенсә ҡыҙыҡлы. Элек тә үҙ-ара етерлек аралаша инек, быңан һуң аралашыу йышайҙы, тип әйтә алмайым. Сығарылыш уҡыусылары булараҡ, беҙҙең хәҙер бер генә бурысыбыҙ бар - яҡшы итеп уҡырға, белгәнеңде ҡабатлап, бер системаға һалырға.

**▸ Бөгөн мәктәп стандарттары мифик "уртаса статистик" балаға тәғәйенләнеүен, ә күп-хәҙер дуҫлыҡтың нимә икәнен яҡшы аңлайһығыҙ, уларҙы ниндәй сифаттарына ҡарап һайлайһығыҙ?**

**Азат:** Ауылда уҡығанда класташтарың менән мәктәптә генә осрашаһың, уларҙы яҡшылап белмәйһең дә. Бында иһә, уҡыуҙа ла бергәһең, ятаҡта ла, шуға кешене бар яҡлап күрәһең. Кемдең кем икәне шунда уҡ беленә. Башҡа уҡыу йорттарындағы кеүек, кластарға бүлеп, айырмайбыҙ бер-беребеҙҙе, киреһенсә, өлкәндәр бәләкәйҙәрҙе яҡлап йөрөтә.

**Нәғим:** Гимназияла нисә уҡыусы бар, уларҙың барыһын да беләһең, барыһын да дуҫ иҫәпләйһең. Минеңсә, кешенең яҡшы сифаттарын да, кире яҡтарын да аңлап ҡабул итергә кәрәк. Ә дуҫлыҡ өсөн бер генә талап барҙыр ул - ауыр саҡта дуҫ кеше һине ташып китергә тырышабыҙ. Гимназиябыҙға беҙҙән бүләк булһын, тигән уртаҡ уй бейек үрҙәргә илтә ала.

**Азат:** Волейбол, баскетбол буйынса көслө командабыҙ бар, яңы спорт комплексы асылғандан һуң, бокс үҫеше өсөн шарттар яҡшырҙы. Милли көрәш буйынса бәйгеләрҙә егеттәр тик беренсе урындар яулай. Бейеүселәребеҙҙе лә бар республика белә, һуңғы йылдарҙа "Байыҡ" телевизион конкурсында ла уңыштар байтаҡ булды. Ҡурайсылар ансамбле, хор - үҙеңде үҫтерәм тиһәң, гимназиябыҙҙа бөтөн йүнәлештә лә түңәрәктәр эшләй.

**▸ Ябай уҡытыусы - белем бирә, яҡшы уҡытыусы - аңлата, алдынғы ҡарашлы уҡытыусы - күрһәтә, ә бөйөк уҡытыусы яңы бейеклектәргә илһамландыра, тиҙәр. Һеҙ**

анда беҙҙе ишек төбөндә ҡаршылай. Беҙҙең менән зарядка эшләй, ҡар көрәй. Шаян һүҙҙәр менән кәйефте күтәреп ебәрә. Йыуынып, ашап, мәктәпкә килгәндә ул һине тағы ла ҡаршы алып тора. Ул уҡытҡан предмет - кеше һәм йәмғиәт фәне лә иң мөһим дәрестәрҙең береһе.

**Азат:** Асыҡ күңелле кеше ул, кабинетына инеп, үҙеңде борсоған һорауҙарға яуап алырға, һөйләшеп сығырға ла була. Дәресте лә матур алып бара. Бына әле генә гимназияның юбилейына арналған китап сыҡты, унда ла уның тырышлығы һалынған.

**Нәғим:** Беҙ Әлфир Сулпан улын Башҡортостанға кәрәкле кеше, тип иҫәпләйбеҙ һәм үҙебеҙ ҙә уның кеүек булырға ынтылабыҙ. Шулай уҡ тәрбиәселәр тураһында ла йылы һүҙҙәрҙе күп әйтергә булыр ине. Ситтә булғас, әсәй, атай һөйө-

булмағас, был гимназияға күстем, уҡыуыма ла иғтибарҙы арттырҙым. Шуға ла Эске эштәр министрлығы мәктәбенә уҡырға барырға, киләсәктә генерал дәрәжәһенә етергә хыялланам. Хатта полиция эшен еңеләйтеү йәһәтенән үҙемдең тәҡдимдәрем дә бар, йәғни, мин әлегә хыял ғына булып тойолған вазифамда нимә эшләйәсәгемә тиклем беләм.

**Азат:** Бында күп нәмә ауылдағы тормоштан айырыла. Дөрөҫөн әйткәндә, ҡарашың киңәйә, бөтөнләй икенсе төрлө фекер йөрөтә башлайһың, яңы мөмкинлектәр асыла. Ирегет тормошта аяғына ныҡ баҫып торорға тейеш, шуға ла һөнәр һайлағанда уйлап эш итергә кәрәк. Ҡайҙалыр ситкә китергә теләмәйем, юғары белемде Өфөлә алыр инем. Уйҙарымды ысынбарлыҡ итеү өсөн әлегә ҡулымдан килгәнде эшләргә тырышам - белем алам, ҡалғаны минән түгел, ә имтихандарҙың нисек үтеүенән, мин һайлаған уҡыу йортонда конкурстың нисек булыуынан торасаҡ. Шулай ҙа хәл ителмәй торған нәмәләр булмай, барыһы ла яҡшы булыр, тип ышанам.

**Айсинә:** Интернатта уҡыған осорҙа тормошҡа оло әҙерлек үтәһең. Кешеләрҙе генә өйрәнмәйһең, үҙең дә үҙгәрәһең. Ауылда атай-әсәй теге яҡтан да, был яҡтан да өйөрөлөп, ҡарап ҡына тора, ә бында үҙаллылыҡҡа, яуаплылыҡҡа өйрәнәһең. Ауылда йәшәгәндә донъяла барған ваҡиғалар ҙа һине урап үтә кеүек, бында уларҙың ипкенен тояһың, һәр хәлдә, хәбәрҙәр булырға тырышаһың. Бөгөн Рәсәйҙең көнсығышҡа йөҙө менән бороло-уын күреп торабыҙ, шуға ла мин киләсәктә ҡытай телен өйрәнер инем, бәлки, иҡтисадсы ла булырмын. Ауылда уҡыһам, бөтәһе кеүек, йә уҡытыусы, йә табип булырға хыялланған булыр инем, кем белә? Шуға ла милләтебеҙгә кәрәкле кеше булып үҫер өсөн быңдай белем усаҡтары бик кәрәк.

# ҺӨЙӨҮ ҺҮҘЕ...

## яңғырарға тейеш!

**селек уҡыусыларҙың был сиктәргә һыймауын белгестәр күптән таныны инде. Күңелһеҙ тестар, ялҡытҡыс стандарттар белем алыу процесын күңелһеҙ сараға әүерелдермәйме?**

**Айсинә:** Уҡыу - энә менән ҡойо ҡаҙыу, тиҙәр, ҡасан уҡыуы еңел булғаны бар икән? Бар ерҙә тырышлыҡ кәрәк. Нимәнелер аңламайһың икән, ятаҡта йәшәгәс, башҡаларҙан һорарға була. Бер ауырлығын да тоймайым.

**Нәғим:** Хатта Берҙәм дәүләт имтихандары ла аптыратмай беҙҙе. Тиҙ генә аңламаған тема тураһында һөйләшеп алабыҙ, ҡурҡырлыҡ нәмәһе лә ҡалманы. Шаярып әйткәндә, БДИ - ул еңел генә бер имтихан. Дуҫтар менән бөтөн нәмә лә еңел тойола.

**Зәриә:** Уҡыуҙан тыш, төрлө саралар күп үтә, түңәрәктәр, спорт секциялары күп, күңелһеҙләнеп ултырырға ваҡыт та юҡ. Беҙҙең гимназия-интернат хатта башҡа башҡорт гимназияларынан да айырыла, беҙҙә уҡыу ҙа күпкә ҡыҙыҡлыраҡ. Күп кешеләрҙең тормошонда был гимназия ҙур роль уйнағандыр, тип уйлайым. Уҡыу йортоноң үҙ президенты, төрлө йүнәлештәрҙе етәкләгән министрҙары бар. Нәғим, мәҫәлән, спорт министры. Уларҙың иғтибарынан бер нәмә лә ситтә ҡалмай.

**Нәғим:** Гимназия - ул ҙур бер ғаилә кеүек. Әлеге мәлдә хатта БДИ түгел, ә дуҫтар менән айырылышыуҙы уйлау күпкә ауырыраҡ. Ошо йылылыҡты һәр башҡорт балаһы татып ҡарарға тырышырға тейеш.

**▸ Һәр йәмғиәтте татыулыҡ, кешеләрҙең бер-береһе менән дуҫ йәшәүе ныҡлы итә. Һеҙ**

ламай, ул аҙағынаса һинең менән була. Тоғролоҡ йылдар дауамында һынала. Киләсәктә лә бер-беребеҙ менән дуҫ булып булмаһа ла, яҡшы мөнәсәбәттә ҡалырбыҙ, тип ышанам. Хәйер, йылдар үтеү менән дуҫлыҡ хистәре тағы ла нығынырға тейеш.

**Зәриә:** Дөрөҫөрәге, дуҫлыҡ ваҡыт иләге аша үтергә тейеш. Мин районда ҡалған дуҫтарымдың күбеһе менән аралашмайым хәҙер, сөнки уларҙың терәген тоймайым. Шуға ла дуҫтар күп булмай, тигән уйҙамын.

**Айсинә:** Дуҫтың күп булыуына ҡарағанда, тоғро булыуы хәйерлерәк. Гимназияла дуҫлыҡ төшөнсәһе туғанлыҡҡа яҡыныраҡ, шуға ла ул ҡәҙер-

**уҡытыусыларығыҙҙы ниндәй итеп беләһегеҙ?**

**Азат:** Гимназияның уҡытыусыларын бер һыҙат берләштерә - улар иҫ киткес кешелекле һәм һине һәр ваҡыт аңларға, ярҙам итергә тырыша. Бөгөн йәмғиәттә уҡытыусының абруйы төштө, тиҙәр, әммә был беҙҙең гимназияға һәм уҡытыусыларға һис ҡағылмай. Уларға ихтирамыбыҙ сикһеҙ. Тыуған ауылдан ситтә уҡығас, ҡайһы саҡта күңел төшөп киткән саҡтар була. Шул саҡта йылы һүҙ әйтеп, кәйефте лә күтәреп ебәрәләр. Бушҡа әрләгән, күңелде ҡыйған бер уҡытыусыны ла белмәйем. Хәҙер иң яҡшы, иң яратҡан уҡытыусыларығыҙҙы һанап сығығыҙ, тиһәгеҙ, мин уларҙың барыһын да әйтеп

үе етмәй, тәрбиәселәребеҙ кәрәк саҡта дәртләндереп, кәрәк саҡта йәлләп ебәрһә, рәхәт булып китә.

**▸ Уҡыу, үҙеңде үҫтереү өсөн бар шарттар булдырылған ғәжәп матур бер донъяла йәшәйһегеҙ, йөҙөгөҙҙән нур бөркөлөп тора, интернатығыҙ тураһында башҡаларға һөйләгәндә уны ниндәй итеп һүрәтләйһегеҙ?**

**Нәғим:** Әйткәйнем инде, бындағы йылылыҡты һәр кем татырға ынтылһын ине. Бер мәктәпте лә бәләкәсәйтеп күрһәткем килмәй, әммә ауылда уҡығандар йышыраҡ үҙе тураһында ғына уйлай. Ә бында халҡың, илең тураһында уйларға өйрәнәһең. Мәҫәлән, миндә Өфөгә килгәс кенә ошо тойғолар уянды. Күңелендә

> ***Бер мәктәпте лә бәләкәсәйтеп күрһәткем килмәй, әммә ауылда уҡығандар йышыраҡ үҙе тураһында ғына уйлай. Ә бында халҡың, илең тураһында уйларға өйрәнәһең. Мәҫәлән, миндә Өфөгә килгәс кенә ошо тойғолар уянды. Күңелеңдә ватансылыҡ тойғоһо ни тиклем иртәрәк барлыҡҡа килә, маҡсаттарыңа өлгәшеү өсөн мөмкинлектәр ҙә ҙурая. Шуға ла ситкә китеп белем алыуҙан ҡурҡмағыҙ. Бөгөнгө көндә белемдән дә ҙурыраҡ байлыҡ юҡ. Ә ул ни тиклем сифатлыраҡ булһа, шул тиклем яҡшыраҡ. Мин башта йырсы булам, тип кенә хыялланһам, аҙаҡтан хәрби кеше булыу теләге уянды.***

лерәк тә. Элек тә төрлө конкурс-бәйгеләргә күп йөрөй инем. Ләкин бындағы кеүек, минең уңыштарыма һөйөнгән дуҫтарым һирәк ине. Кәрәк булһа, барыһы ла ярҙам итә, еңһәң, ихлас ҡыуаналар. Директорыбыҙ үҙе изге теләктәр әйтеп оҙатып ҡала, маҡтап ҡаршы ала. Шуға ла уларҙың ышанысын гел аҡлағы килә.

**Нәғим:** Спорт ярыштарына барһаҡ та, үҙ-ара ярышмайбыҙ, ә башҡа мәктәптәрҙе уҙ-

сығыр инем, сөнки уларҙың һәр береһенең үҙенә генә хас өҫтөнлөгө бар.

**Зәриә:** Директорыбыҙ Әлфир Сулпан улы Ғайсиндың да беренсе күргәндә үк кешелекле булыуына иғтибар иткәйнем. Гел күтәренке кәйефтә, әйтерһең, уның бер хәсрәте лә юҡ.

**Нәғим:** Ысынлап та, ундай етәксе һирәктер ул. Уны көнөнә, иң кәмендә, ун тапҡыр ғына күрәһең. Иртән ете тулмаҫ элек беҙ зарядкаға сыҡҡ-

ватансылыҡ тойғоһо ни тиклем иртәрәк барлыҡҡа килә, маҡсаттарыңа өлгәшеү өсөн мөмкинлектәр ҙә ҙурая. Шуға ла ситкә китеп белем алыуҙан ҡурҡмағыҙ. Бөгөнгө көндә белемдән дә ҙурыраҡ байлыҡ юҡ. Ә ул ни тиклем сифатлыраҡ булһа, шул тиклем яҡшыраҡ. Мин башта йырсы булам, тип кенә хыялланһам, аҙаҡтан хәрби кеше булыу теләге уянды. Бының өсөн музыка гимназия-интернатында спорт секциялары етерлек кимәлдә

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**70 йыллыҡ тарихы булған Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында белем алып, хәҙер ҡайҙа һәм кем булып эшләп йөрөмәһендәр, был уҡыу йортоноң уҡыусыларын бер нәмә берләштерә - улар үҙ халҡын ярата белә һәм ғүмере буйына уның өсөн кәрәкле кеше булырға ынтылып йәшәй. Гимназияның киләсәге тураһында һөйләшкәндә, йәш әңгәмәселәрем: "Унда беҙҙең кеүек алдынғы ҡарашлы уҡыусылар тағы ла күберәк буласаҡ", - тип яуап биргәйне. Ә мин, улар менән һөйләшкәндән һуң, халҡыбыҙҙың киләсәге ышаныслы ҡулдарҙа икәненә инандым. Рәми рухына, халҡыбыҙҙың әхлаҡи принциптарына, гуманлылыҡ идеяларына тоғро булыу - ул үҙ асылыңа тоғро ҡалыу менән бер. Йәш быуынды тәрбиәләүҙә ошонан ла дөрөҫ юл юҡтыр, моғайын.**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

**✓ Әллә ниндәй уҫал ағайҙар өйҙө тентей, йәмһеҙ итеп аҡыралар. Уларҙың тауышынан хатта урындыҡта ауырып ятҡан өләсәһе тороп ултырған. Улар ҡысҡырған һайын өләсәһе тертләй һәм бәләкәсәйеп китә.**



Фәрзәнә АКБУЛАТОВА

# Матур тауым – Ямантауым...

Хикәйә



Наил Вәлиев һүрәте.

–Марианна, һинә хат алып килгәндәр! - тип ҡысҡырҙы күршеһе Дилором әбей.

- Балаҡайҙарым яҙғандыр. Хәҙер ҡарармын. - Йорт эштәре менән булышҡан икенсе әбей күршеһенә ҡул ғына һелтәне. - Һал шунда.

Дилором әбей ярһыбыраҡ өндәште.

- Ниндәй эш, ти тағы? Һиңә ул хатты ҡунаҡтар алып килде!

- Ҡунаҡтар? - Марианна әбей һағайҙы. Һыулы ҡулын таҫтамалға һөртә-һөртә ҡапҡа яғынан ынғайланы. Ҡара төҫтәге еңел машина эргәһендә йәш кенә бер ҡыҙ һәм ҡалын кәүҙәле ир-ат баҫып тора ине.

- Дилором, кемдәр улар? Балаларым иҫән-һаумы икән?

Әбейҙең тауышы ҡалтырап сыҡты.

- Тыныслан! Былар хәбәрселәр. Дүшәнбенең үҙенән. Һуғыш йылдары балаларын эҙләйҙәр икән. Һин бит һуғыш осоро балаһы.

- Һуң, уныһы яңылыҡ түгел инде! Үҙенә лә әллә нисә ҡат һөйләгәнем булды. Уға ҡалһа, һин дә һуғыш мәлендә тыуғанһың.

- Эйе, мине лә һуғыш осоро балаһы, тиергә була. Тик һинән өс йәшкә кесерәкмен. Шуғамы икән, минең менән ҡыҙыҡһынманылар. Һине генә һорашалар.

Марианна әбей ҡапҡаны асып, ҡунаҡтарға ҡулын болғаны.

- Тормағыҙ асыҡ урында, эҫе ҡабыр! Инегеҙ ихатаға!

Тегеләр менән күрешкәндән һуң, үҙе беренсе булып һорау бирҙе.

- Түңәрәк дата яҡынлашамы? Шундай мәлдәр етә башлаһа, беҙҙе иҫтәренә төшөрә торғандар. Ветерандар үлеп бөтөп бара... Ни хәл итәһең, ваҡыт беребеҙҙе лә аямай. Һуғыш балалары беҙ ҙә ҡартайҙыҡ. Әле бер ер, әле икенсе ер һыҙлай.

- Һеҙгә зарланырға иртәрәк!

- Минең бабайым Иосиф Егорович та һуғыш осоро балаһы ине. Мәрхүмкәй. Мине ҡалдырып киткәненә быйыл ете йыл тула. Ул минән өлкәнерәк булғас, һуғыш йылдарын яҡшы хәтерләй торғайны. Мин бик асыҡ хәтерләмәйем.

- Марианна Даяновна, һеҙ тыумышығыҙ менән ҡайһы яҡтыҡы?

- Ғүмер буйы Тажикстанда йәшәһәм дә, был яҡтыҡы түгелмен. Иосиф мәрхүмкәйем дә минең кеүек килмешәк. Ул Белоруссия яғынан ине. Яҙмыш осраштыра, яҙмыш йөрөтә әҙәм балаларын. Ғүмер Тажикстанда үтте. Насар йәшәмәнек. Үкенерлек түгел...

- Марианна Даяновна, үҙегеҙҙең ҡайһы яҡтан икәнегеҙҙе әйтһәгеҙсе?

- Рәсәйҙән инде, ҡайҙан булһын!

- Ҡайтҡанығыҙ юҡмы?

Марианна әбей йәш иргә аптырап ҡарап торҙо. Нимә кәрәк баш ҡаланан килеп төшкән ҡунаҡҡа?

- Балалар йортона эләккәндә биш-алты йәштәрҙә генә инем. Кемгә ҡайтайым мин? Етемдең кемгә хәжәте бар? Эҙләткән дә, һорашҡан да кеше булманы.

- Әгәр ҙә булһа? - тине шул саҡ егет.

- Исемең кем, туғанҡай?

- Аркадий исемле, Дүшәнбенән....

Марианна әбей уны тыңлап бөтмәне.

- Быны нимә, Аркадий! Ҡарттарҙың да төрлөһө була, ләкин бөтәһе лә аҡылдан яҙған, тип уйларға ярамай. Тураһын әйтегеҙ, һеҙгә нимә кәрәк был ҡарсыҡтан? Унан дүрт яғығыҙ ҡибла. Минең әле баҡсала эшем күп.

- Марианна Даяновна, беҙ Рәсәйҙән бер хат алдыҡ. Мәрйәм Аҡбирҙина тигән кешене эҙләйҙәр.

- Мәрйәм...

Марианна әбейҙең ауыҙы асылып китте. Нисәмә тистә йылдар уның үҙ исемен ишеткәне юҡ. Мәрйәм! Был бит уға мулла ҡушҡан исем. Хәҙер ят һәм сәйер тойолһа ла, үҙ исеме!

- Мәрйәм... - тип ҡабатланы ул ышанмаған төҫлө. Ирене дерелдәне.

- Мин бит әйттем! Мин бит әйттем! - тип шатланып ҡысҡырып ебәрҙе ҡыҙыҡай.

- Нимәне, балаҡай? - тип һораны Дилором әбей.

- Беҙҙә Рәсәй яғынан килгәндәр бар. Шуларҙың береһе Мәрйәм булырға тейеш, тип мин әйткәйнем!

Марианна әбей ҡапыл бөгөлгәндәй булды. Аркадий уны йәһәт кенә эләктереп алды. Һикегә алып барып ултыртты. Дилором әбей һыу һалынған кәсәне һуҙҙы.

- "Минең ысын исемем Мәрйәм ул", тип минә лә әйткәне булды, - тине Дилором. - Нишләп мәрйәнең исеме Мәрйәм булһын инде, тип, әһәмиәт бирмәнем. Тимәк... Ысын булған икән!

- Мәрйә түгел мин! Күпме әйткәнем бар, - тине Марианна.

- Ну, һин бит Рәсәйҙән.

- Унда ла төрлө халыҡ йәшәй.

- Ҡайҙан һин? Хәтерләйһеңме?

- Ямантау, Ямантау... - тип ҡабатланы Марианна әбей. - Шул һүҙ генә иҫкә килә.

- Әйттем бит Башҡортостандан тип!- ҡыҙҙың тауышы тағы ла сағыуыраҡ ишетелде. - Бына, картала күрһәтелгән.

- Силәбе өлкәһенән дә булыуы ихтимал, Фатима, - тине Аркадий.

- Юҡҡа бәхәсләшмәгеҙ, балалар. Мин Башҡортостандан. Документта шулай теркәлгән. Ләкин бер сығып киткәндән, Башҡортостанда булғаным юҡ. Күҙ алдына ла килтерә алмайым. Ямантау... Шул һүҙ иҫтә. Ҡалғаны томан эсендә. Мине эҙләйҙәр, тиһегеҙ инде? Был ҡарсыҡты кем эҙләргә тейеш?

Марианна әбей хат юлдарына күҙ һалды. Тоҡомбәтов Мырҙағол тигән ар-ат үҙенең Мәрйәм исемле апаһын эҙләй. Ләкин Марианнаның бер ниндәй ҙә ҡустыһы булманы. Ул әсәһенең яңғыҙ ҡыҙы ине. Өләсәһенең улдары булды. Улар барыһы ла фронтта ятып ҡалды.

- Минең ундай туғаным юҡ, - тип баш сайҡаны Марианна әбей. - Тимәк, Башҡортостандан бүтән берәүҙе эҙләйҙәрҙер...

Әбейҙең тауышы һүрелде.

- Һеҙ минең йөрәгемде телдегеҙ. Онотолған бала саҡҡа ҡайтҡандай булдым. Ә уны иҫләүе бер ҙә анһат түгел. Минең әсәйҙе төрмәгә алып киткән көндө хәтерләйем былай, бөтөнләй иҫемдән юйылмаған. Юҡ-юҡта хәтеремә килеп төшә. Шул саҡта үҙемде теге биш йәшлек бала хәлендә тоям. Бер туғаным юҡ, быныһын өҙөп әйтәм.

- Кире ҡағырға ашыҡмағыҙ, Марианна Даяновна! Мырҙағол тигән иптәш әсәйегеҙҙең улы була. Бына, иғтибар менән тыңлағыҙ: "Беҙҙең атайҙар башҡа. Минең әсәйем Миңлебикә атайыма 1948 йылда кейәүгә сыға. Тағы ла бер йылдан мин донъяға килгәнмен".

Марианна әбей ауыҙын асҡан килеш тора бирҙе. Шунан ҡалтыраған ҡулдар йәнә хатҡа һуҙылды. Ул күҙлеген ашыҡмай ғына кейҙе. Хатты уҡып сыҡҡас, йомарлап тотоп алды. Йомарлап тотто, сөнки был хаты уны ватаны, үткәне менән бәйләүсе еп ине. Ошо ептең осон юғалтыуҙан, өҙөлөүенән ҡурҡты.

- Был мөғжизә...

Шул һүҙҙе генә көткән тиерһең, ҡара сәсле ҡыҙыҡай уны ҡосаҡлап алды.

- Фатима, әллә һин нығыраҡ илайһың?

- Аркадий, оло кешене ҡыуандырҙыҡ бит!

Марианна әбей тынғылығын юғалтты. Ире Иосиф иҫән булһа, ҡалай ҡыуаныр ине. Бергәләшеп Башҡортостанға барып килерҙәр ине. Ире Иосиф та етем бала. Атаһы хәрби кеше була. Белоруссияға ебәрәләр. Шунда һуғыш эсендә ҡалып, атаһын да, әсәһен дә юғалта. Иосиф, меҫкен, үҙенең кемлеген белмәне. Улар икеһе лә балалар йортонда үҫтеләр. Студент йылдарында өйләнештеләр. Ике ул үҫтерҙеләр. Ләкин бер ҡасан да нәҫел-нәсәбен эҙләмәнеләр. Уларға шулай тыныс ине. Бала саҡ йөрәккә шул тиклем ҡаты йәрәхәт һалды. Иҫләй башлаһалар, шул йәрәхәт тотош ғүмерҙе телеп үткәндәй. Шуға ла иҫләмәнеләр ҙә, эҙләмәнеләр ҙә. Улар ике етем бер бөтөн ине, бер-береһенең хәлен тын алышынан белеп торҙолар. Етемдең кемгә кәрәге бар инде? Ҡайһы туғанына хәжәтһең? Ошо көнгә тиклем Марианна ла шулай тип уйлай ине. Ләкин бөгөн тормошонда нимәләр үҙгәрҙе. Иосиф ҡына был турала белмәй. Үкенес. Иосифтың вафатына ете йыл үтеп китте. Шулай татыу йәшәнеләр. Йөрәк сире менән ҡапыл ғына китеп барҙы иргенәһе. Ике улдары ситтә. Был яңылыҡҡа улар шатланыр, моғайын.

* * *

Марианна ныҡлы ҡарар ҡылды. Әле аяҡ йөрөгәндә тыуған яҡтарына ҡайтып килергә кәрәк. Әсәһенең ҡәберен барып күрер, исмаһам. Нисәнсе йылда вафат булды икән, бахырсыҡ? Мырҙағол был турала яҙмаған. Әсәһе, әсәкәйе...

Марианна атаһын бөтөнләй хәтерләмәй. Уны һуғыш башланыу менән фронтҡа алып киттеләр. Шунан Миңлебикә апай икенсе ауылға, үҙенең әсәһе янына, күсеп ҡайтты. Ул мәлдәрҙе Марианна әҙ-мәҙ иҫләй. Ауыл тауҙар менән уратып алынғайны. Бейек-бейек тауҙар. Бер көндө әсәһе уны яҡындағы тауға алып менде. Тирә-яҡ шул тиклем асыҡ күренә. Марианна ҡыуанып сәпәкәй итә.

- Әсәй, бынан бөтөн ер күренә, ивет?

Миңлебикә апай баш ҡаға.

- Ә нишләп атайым күренмәй?

- Берәй ваҡыт күренер.

- Тағы ла бейегерәк тауға менгәсме? Әсәй, иң бейек тау нисек атала? Ямантаумы?

- Нишләп Ямантау булһын, ти?

- Бөтөн дейеүҙәр шундай йәшәй бит. Өләсәйем шулай ти. Ә минең атайым әле дейеүҙәр үлтереп йөрөй.

- Дейеүҙән яман дошман бар, ҡыҙым. Атаң шуларҙы ҡыра.

- Ямантауға менгәс, уларға атайымды эҙләгәндә әйтермен. Дейеүҙәр асыуланмаҫ, ивет?

Әсәһе көнө-төнө эштә. Улар бик һирәк күрешә торғайны. Хәтирәләр тоноҡ. Ләкин әсәһен алып киткән саҡтары бөгөнгөләй күҙ алдында.

Әллә ниндәй уҫал ағайҙар өйҙө тентей, йәмһеҙ итеп аҡыралар. Уларҙың тауышынан хатта урындыҡта ауырып ятҡан өләсәһе тороп ултырған. Улар ҡысҡырған һайын өләсәһе тертләй һәм бәләкәсәйеп китә. Марианна өләсәһенең итәгенә йәбешкән. Ул үҙен алып сығып ырғытыуҙарынан ҡурҡа. Сөнки был уҫал ағайҙар өйҙәге бөтөн нәмәне тышҡа быраҡтыра. Яҫтыҡ, юрған...

Бер заман әсәһен алып инәләр.

- Балаҡайым, мине онотма!

- Әсәй, һин ҡайҙа китәһең?

- Алыҫҡа, балаҡайым, һин күрмәгән-белмәгән яҡтарға. Тиҙ генә күрешмәҫбеҙ. Балаҡайым, мин барыбер ҡайтырмын!

- Илама, әсәй! Мин иң бейек тау башына менермен. Ҡул болғармын! Һин мине гел күрерһең. Тик илама!

Әсәһе юҡ, ә ул һаман ҡысҡыра!

- Ямантауға менермен! Ҡул болғармын! Илама, әсәй!

Барып ҡайтырға кәрәк! Марианна ҡарсыҡ Дүшәнбелә йәшәгән Ренард улына шылтыратып, үҙен Мырҙағол атлы ҡустыһы эҙләткәнен әйтте. Аптыраны улыҡайы ла. Аптырамаҫлыҡ түгел шул бындай хәбәргә. Иртәгәһен үк ҡайтып төштө. Тик әсәһенең сәфәргә йыйыныуы ҡыуандырманы шикелле. Әсәһенең сәләмәтлеге өсөн борсола инде.

- Бик алыҫ юлға сығырға итәһең түгелме? Әсәй, Памир тауҙарымдан тыш, бер сәғәт тә тора алмайым, уларҙан бер ҡайҙа ла китәһем юҡ, ти торғайның.

- Унда ла тауҙар бар, улым. Кешеләрен онотоп бөтһәм дә, тауҙар барлығын яҡшы хәтерләйем. Шул тауҙар менән артабанғы яҙмышыма йөгонто яһаны. Шуға ла әсәйең тау ярата.

Юғары уҡыу йортон тамамлағас, ҡайҙа эшкә китергә тигән һорау алға килеп баҫты. Иосиф менән өйләнешкәндәр ине инде.

- Иң бейек тауҙарға алып кит, - тине Марианна.

Быны шулай Памир яҡтарына килеп сыҡты улар. Ошонда мәктәптә эшләнеләр. Болғансыҡ йылдарҙа ла күсеп китмәнеләр. Улар өсөн Тажикстан үҙ ватандарына әүерелгәйне. Ҡайҙа китһә лә Марианна Памир тауҙарын һағынып ҡайта.

Бөгөн улы менән Урал тауҙарына юл алды улар.

* * *

Ҡаршы алыусыларҙың береһе әбейҙе ҡосаҡлап алды.

- Мин Мырҙағол ҡустың булам!

Икеһенең дә күҙе йәшкәҙәне.

- Шәп тораһыңмы ғүмерҙә лә күрмәгән ҡустым! - тиғән булды Марианна.

- Күрмәгән генә түгел, әсәй, ә барлығын да белмәгән ҡустың бит, - тине Ринард.

- Мәрйәм апай, беҙҙе машина көтә.

"Мәрйәм, Мәрйәм..." тип ҡабатланы Марианна һәм, үҙе лә һиҙмәҫтән, баш сайҡаны. Тыуған ере, туғандары менән бәйләгән исем бит ул. Нисектер, сәйер ишетелгәндәй. Ренард улына ла ҡыҙыҡтыр, ул да йылмайып ҡуйҙы. Башҡортостанға, Өфө аэропортына килеп төшкәс, тынысланған һымаҡ ине. Ләкин уларҙы ҡаршы алған машина урман яҡтарына юл тотҡас, күгелйем тауҙар теҙмәһе күренгәс, тулҡынланыуы көсәйҙе.

- Өләсәйемдең өйө бармы?

- Юҡ, Мәрйәм апай, ул иҫке йорт күптән һүтеп алынған. Урынында яңы йорт ҡуйғандар.

- Мырҙағол, туғанҡайым! - Марианна ҡустыһының арҡаһынан һыпырҙы. - Нишләп мине эҙләргә булып киттең? Беҙҙе бит бер нәмә лә бәйләмәй! Мин үҙем дә туғандарым барлығына һаман ышанып бөтә алмайым. Өйрәнә алмайым, тиемме...

***✓ Кемдер уйнап-уйнап та, ҙур ролдәре менән халыҡ күңелендә ҡалмауы мөмкин, әммә бәләкәй генә роль уйнап, халыҡ күңелендә Тыр-тыр булып та, Аҡбай булып та, Байыш, Ҡуҙыйкүрпәс булып та ҡалырға була бит...***



- Эҙләй башлағанда, эштең ыңғай булырына ышанмай инем... Нисектер ярҙам итеүселәр табылды. Шулай китте лә китте. Әсәйем: "Шул балам ҡайҙа икән?" - тип һыҙлана торғайны. Шул баланы эҙләнем инде...

- Бала, тиһең... - Марианна йылмайған ыңғайға күҙҙәрен селт-селт йомоп алды. - Әбей, тип, күҙ алдына ла килтермәгәнһеңдер ҙә.

- Күҙ алдына килтермәһәм дә, нисә йәштә икәнеңде самалай инем, Мәрйәм апай.

- Эйе-е-е, беҙҙең йәш айырмаһы шаҡтай. Кем ине һинең атайың, Мырҙағол? Ҡасаныраҡ вафат булды? Әсәйемдән иртәрәкме?

- Бик иртә китте атайым. Ул һуғыштан сулаҡ булып, ауыр яралар менән ҡайта. Йәше лә арыу ғына булған. Ҡарт һалдат.

- Ҡарт һалдат? Тимәк, уны фронҡа үҙ ғаиләһе оҙатҡан булған.

Мырҙағол уйланып ултырҙы. Шунан баш ҡаҡты.

- Апай, уның ғаиләһе ҙур булған. Биш балаһы...

- Бишәү...

Марианна әбейҙең башы әйләнеп китте хатта. "Нисек әсәйем биш балалы иргә кейәүгә сыкты икән?"

- Тик, - тип һүҙен дауам итте Мырҙағол, - улар барыһы ла ҡырыла. Аслыҡ йылында ағыулы башаҡ ашап, ҡатыны ла, балалары ла үлә. Атай, бахыр, бына шулай ҡороған нигеҙгә ҡайтып төшә. Унан әсәйҙе лә төрмәнән сығаралар. Ике бәхетһеҙ йән ҡауыша. Береһенең аяҡтар йөрөмәй, береһе һыңар ҡул.

- Әсәйем...

- Боҙло һыуҙа ағас ташып, һыуыҡ тейҙереп, бик ыҙаланы. Бер нисә йылдан йөрөй алмай башлай. Бына шулай беҙ күмәкләп ҡараныҡ әсәйҙе.

- Йә, Хоҙай! - тип әсенеп өндәште Марианна. - Ҡалай бәхетһеҙ йән эйәһе булған...

Ренард борсола төштө.

- Әсәй, тыныслан.

- Беҙ бик һәйбәт йәшәнек. Әсәйем ҡәҙерле булды, - тине Мырҙағол. - Килененң дә асыҡ кеше. Әсәйемде хәтерләһәң, уға оҡшаған. Килен - ҡөйнә буҫағаһынан, тиҙәр бит.

- Һөйлә үҙеңдең ғаиләң тураһында.

* * *

Ҡунаҡтар килеп төшөүгә ҙур табын әҙерләнгәйне инде. Марианна үҙе менән күрешергә килгән ауылдаштарына алмаш-тилмәш диҡҡәт менән ҡараны. "Йөҙҙәре таныш та һымаҡ", тип уйланы. Үҙ уйынан үҙе көлдө. "Ҡайҙан улар - мине, мин уларҙы беләйем, ти, инде?.." Шунан күңелгә икенсерәк фекер ҡунды. "Ә йөҙ һыҙаттары ят түгел, сөнки улар минең ҡандаштарым бит... Тауыш моңо, интонацияны, хәрәкәттәре - береһе лә ят түгел. Үҙемдеке. Шуны тоям". Ошоларҙы уйлағандан һуң, Марианнаға рәхәт булып китте. Ул улына ғорур ҡарап алды: "Бына әсәйеңдең тамырҙары, бына әсәйеңдең үткәне". Тәүге көн ауылдаштар, туған-тыумаса менән күрешеүҙәр, осрашыуҙар булараҡ үтеп тә китте. Иртәгәһен Мырҙағол менән әсәләренең ҡәберенә зыярат ҡылдылар.

**(Дауамы бар).**

*ИЖАДХАНА*

**Бөгөнгө ҡунағыбыҙ -Башҡортостандың халыҡ артисы, Шәйехзада Бабич исемендәге Йәштәр дәүләт премияһы лауреаты, "Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһы дикторы Фирҙәт Ғәлиев. Уның Тыр-тыр образын һынландырып, меңәрләгән кескәй тамашасының яҡын дуҫына әйләнеүе бер кемгә лә сер түгел. Донъялағы иң һынсыл тамашасыны, иң ғәҙел тәнҡитсене - балаларҙы үҙ яғына еңел ауҙара алған актер менән әңгәмә барышында уның ижад ысулдары, хеҙмәте серҙәре тураһында һөйләүен үтендек һәм бик үҙенсәлекле яуаптар ишеттек.**

# АШЫҒЫП ЙӘШӘЙЕМ...

## Йәки Тыр-тыр менән бәләкәй әңгәмә



**➔ Һеҙҙе күптәр театр артисы булараҡ та, "Сәңгелдәк" тапшырыуындағы Тыр-тыр образы буйынса ла, саралар алып барыусы нәфис һүҙ оҫтаһы тип тә, алыштырғыһыҙ диктор итеп тә белә. Башҡортостан юлдаш телеканалында алып барған төрлө тапшырыуҙарығыҙ аша ла киң йәмәғәтселеккә яҡшы танышһығыҙ. Ә тамашасы һеҙҙең тағы ниндәй сифаттарығыҙҙы, ниндәй һөнәрҙәрегеҙҙе белмәй икән?**

- 1982 йылда, унынсы синыфты тамамлағандан һуң, Өфөгә килеп, башкөллө сәнғәт донъяһына сумдым. Сәнғәт институтында тырышып уҡып, актер һөнәре алдым. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, сәхнә тормошом башланған ғына осорҙа миңә йыл ярымға юғалып торорға тура килде. Әлбиттә, мин бер ҡайҙа ла юғалманым, ә сәхнә эшенән бер аҙ ситләштем генә. Башҡорт дәүләт филармонияһында директорҙың концерт эштәре буйынса урынбаҫары булып эшләп алдым. Үҙемде насар ойоштороусы булдым, тип әйтә алмайым, әммә Башҡорт дәүләт академия драма театрынан саҡырыу килгәс, директорҙың өгөтләүенә ҡарамай, театрға кире ҡайттым. Филармонияның ул саҡтағы директоры Зинфира Тимерхан ҡыҙының: "Театрға ҡайтҡың киләлер, аңлайым, әммә һинең ойоштороу һәләтең бар, һин етәксе булып эшләй торған кеше", - тип, уңыштар теләүе хәтерҙә.

Әле бына 24 гинуарҙа "Башҡортостан" Дәүләт концерт залында (элекке Нефтсе мәҙәниәт һарайы) үтәсәк ижад кисәмде ойоштороған ваҡытта ойоштороу һәләтемде өр-яңынан иҫкә төшөрҙөм. Ысынлап та, мин кеше менән һөйләшә, кешене өгөтләй беләм. Шул сифатымды, бәлки, башҡалар белмәйҙер ҙә.

"Тамыр" телерадиостудияһында Тыр-тырҙы 17 йыл уйнап ташлағанмын икән. Мине күптәр балалар менән ихлас күңелдән аралашыусы Тыр-тыр итеп тә күреп өйрәнгән. Әйткәндәй, өлкәнерәк быуын вәкилдәре, бигерәк тә журналистар: "Һине күп кеше Тыр-тыр тип әйтә ул, ә һин беҙҙең өсөн иң беренсе нәүбәттә - Аҡбай", - ти. Мин 1989 йылдың 1 сентябрендә асылған Милли йәштәр театрында тәүге актерҙар составында булдым бит. Шунда "Ауыл эте Аҡбай", уның икенсе серияһы "Аҡбай нинә күңелһеҙ?" тигән спектаклдәр гөрләп үткәйне, мин Аҡбай ролендә уйнағайным. Ошо тамашаларға халыҡ ағылып йөрөй торғайны. Балалар менән эшләү, улар күңелен аңлау һәләтлеген, бәлки, тап ошо театр тәрбиәләгәндер ҙә әле миндә...

Тыр-тыр йәки Аҡбай итеп кенә түгел, ҡайһы берәүҙәр, мәҫәлән, "Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу" спектаклендәге ролемдә - Ҡуҙыйкүрпәс итеп хәтерләй. Кемдер Илшат Йомағоловтың "Буш сәңгелдәк" комедияһындағы Тимер тип иҫләй. Бер ваҡыт Милли йәштәр театрында Мостай Кәримдең "Салауат. Өн аралаш ете төш" спектаклендә мин Байыш тарханды уйнаным. Ошо ролем өсөн 1997 йылда Шәйехзада Бабич премияһына лайыҡ булдым. Башҡорт дәүләт академия драма театрына күскәс, ошо уҡ спектаклде Илдар Ғиләжев ҡуйҙы һәм мин Байыш тархандың улы Илеште уйнаным. Был ролде лә яратып уйнаным...

**➔ Ә бығаса уйнамаған, әммә уйнарға теләгән ролдәрегеҙ бармы?**

- Мин бер ваҡытта ла ниндәйҙер ролдәр тураһында хыялланманым. "Был минең кумирым" тигән кешем дә булманы. Мин ижад кешеләренә һәр саҡ һоҡланып ҡарайым, әммә сәхнәлә ниндәйҙер актерҙы ҡабатларға тырышыу дөрөҫ түгел, тип уйлайым. Бөйөк актер - бөйөк актер булып ҡала, уны ҡабатлау мөмкин түгел. Уның менән һоҡланып ҡына була. Шуның өсөн "Ошо ролде уйнаһам ине", тигән хыял йөрөтмәнем бер ҡасан да. Сәхнә миңә бик күп матур образдар, ролдәр бүләк итте. Аллаһы Тәғәләне лә уйнаным. "Ең алыштырған" спектаклендә Еңде уйнаным. Ошо спектаклдә бер-береһе өҫтөнә ҡуйылған ике метр ярымлыҡ бейек түңгәктәр өҫтөнә менеп, ҡолап төшөп, ҡулымды имгәттем. Ҡулым ҡатты, шешеп сыҡты, әммә уйнап бөттөм. Шулай уҡ "Мөхәббәт реестры"нда режиссерыбыҙ пьесала булмаған Үлем фәрештәһе ролен уйлап тапты. Аҡ кейемле, аҡ йөҙлә, әммә бер һүҙ өндәшмәүсе шул Үлем фәрештәһе халыҡ күңелендә һаҡланып ҡалған. Бер халыҡ-ара фестивалдә пластик образды оҫта һынландырған өсөн диплом менән бүләкләнеләр. Тыр-тырға килгәндә, күп кешеләр, хатта, ҡайһы бер актерҙар миңә "Һин бит Тыр-тыр", тип кәмһетергә, мыҫҡылларға маташты. Кемдер уйнап-уйнап та, ҙур ролдәре менән халыҡ күңелендә ҡалмауы мөмкин, әммә бәләкәй генә роль уйнап, халыҡ күңелендә Тыр-тыр булып та, Аҡбай булып та, Байыш, Илеш, Ҡуҙыйкүрпәс булып та ҡалырға була бит әле...

**➔ Һеҙ шул тиклем дәртле, йәнле, хәрәкәтсән, эшсән кешеһегеҙ. Ә ошо көстө ҡайҙан алаһығыҙ һуң?**

- Көс һәр кемдә бар, уны юҡҡа-барға исраф итмәҫкә генә кәрәк. Ашығып йәшәргә кәрәк, тип уйлайым. Был минең характерымда, күрәһең. Ашығып атлайым. Ашығып эшләргә ятам. Мин яй, оҙаҡ эшләгәнде, һуңлағанды яратмайым. Мин кешене көттөрөргә яратмайым. Сәғәт унда осрашабыҙ, тигәнмен икән, ни өсөн мин 15-20 минутҡа һуңлап килергә тейешмен? Биш минутҡа алда киләм, көтөп ултырырға әҙермен. Әйткән һүҙемдә торорға тырышам. Теүәллек яратам. Ниңә улай икән? Белмәйем. Шулай өйрәнгәнмен...

**➔ Кәйефһеҙерәк сағығыҙҙа һеҙгә "Тыр-тыр" тип өндәшһәләр, һеҙҙең күңелегеҙ ҡырылмаймы?**

- Юҡ, мин шатланам ғына. Сөнки мин балалар менән эшләйем. Әгәр балалар минең Тыр-тырҙы ҡабул итмәһә, минең менән тапшырыуға төшөргә ҡурҡһа, минең өсөн оят булыр ине. Көсләп, яһалма ғына уйнап йөрөгән образым булыр ине был. Ә былай балалар "Тамыр" студияһына килеп керәләр ҙә: "Ҡайҙа Тыр-тыр? Ул ҡайҙа йәшәй? Әле ҡайҙа ул? Ә уның кәләше бармы?" - тип һорай башлайҙар. Минең муйынға аҫылыналар. Мин уларҙы тиңдәшем һымаҡ күрәм. Мин улар менән тәкмәс атам, йығылып китәм. Быныһы ла яҙмыш бүләге. Тормошомда, юлымда гел генә яҡшы кешеләргә осрауым менән бәхетлемен.

**ЙОМҒАҠЛАП...**

**Халыҡ артисы шулай булырға тейештер ҙә, тигән тойғо ҡалды Фирҙәт ағай менән аралашыуҙан һуң. Ихлас, халыҡсан Тыр-тыр дуҫыбыҙҙы һағынып, Фирҙәт ағай артабан да ошондай ҡабатланмаҫ образдары менән ҡыуандырыр, тип көтөп ҡалабыҙ һәм уны юбилейы менән ҡотлайбыҙ!**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ әңгәмәләште.**

✓ *Бөрйәнгә ҡайтҡанда, ҙур-ҙур йөк машиналарына тейәп оҙатылған йыуан-йыуан ҡарағайҙарҙы күреп, тамырҙарынан, ғаиләһенән айырып, сит яҡтарға һөргөнгә ебәрелгән олатайҙарға оҡшатып, йөрәгем һыҡрана торғайны.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ПЛАНШЕТ ХУЖАЛАРЫ...
## насарыраҡ йоҡлай

■ Кеше һәр ваҡыт оҙаҡ йәшәргә, сәләмәт булырға хыяллана. Аҙ хәрәкәтләнеү, эмоциональ көсөргәнеш кеше организмының әүҙемлеген түбәнәйтә һәм йөрәк һәм ҡан тамырҙары, яман шеш, ревматизм, матдәләр алышыныуы менән бәйле сирҙәр барлыҡҡа килә. Былар барыһы ла организмдың иртә ҡартайыуына килтерә. Күп ғалимдар кешенең сәләмәтлегенә физик күнекмәләрҙең файҙалы булыуын билдәләй. Физик әүҙемлек метаболизм процестарын көйләп кенә ҡалмай, йөрәк ауырыуҙарын да иҫкәртә. Бынан тыш, әүҙем тормош алып барған кешенең кәйефе лә күтәренке була, ул стрестарға ла бирешмәй. Ғалимдар бигерәк тә йәйәү йөрөргә кәңәш итә. Яйлап ҡына атлап йөрөһәң, йөрәк ауыртмай, тиҙәр улар. Йәйәү йөрөргә яратҡан кеше артыҡ ауырлыҡ менән дә яфаланмаҫ, уның үҙәк нервы системаһы ла ныҡ булыр. Тәүҙә 350-500 метрҙы йәйәү үтеп ҡарағыҙ, аҙаҡтан иһә тиҙлекте лә, арауыҡты ла арттырырға мөмкин. Йәй көнө ысыҡ төшкән үләндә яланаяҡ йөрөү файҙалы, ул организмды ныҒыта.

■ Төнөн электрон китаптар уҡырға, телевизор ҡарарға, компьютер артында ултырырға кәңәш ителмәй. Уларҙың барыһының да экраны күк (һалҡын) яҡтылыҡ бүлә, ә ул йоҡо гормоны - мелатониндың бүленеп сығыуын тотҡарлай. Ике аҙна буйына һау-сәләмәт кешеләр "йоҡо лабораторияһы"нда йәшәй. Биш көн буйына бер төркөм йоҡлар алдынан 4 сәғәт буйына ғәҙәти китап, икенсе төркөм уның электрон вариантын уҡыған. Ике көн ял иткәндән һуң, улар ролдәре менән алышынған. Электрон китап уҡыусылар икенсе төркөмдәгеләргә ҡарағанда 10 минутҡа һуңыраҡ йоҡлап киткән, мелатонин күләме күрһәтеүенсә, уларҙың биологик сәғәте теүәл бер сәғәткә артҡа күскән. Уларға кисен йоҡлап китеүе һәм иртән тороуы ауырыраҡ булған. Электрон китап уҡығанда зыяны аҙыраҡ булһын өсөн фонды аҡтан ҡараға, ә шрифт төҫөн ҡаранан аҡҡа алыштырырға кәңәш ителә.

■ Майами университеты (АҠШ) хеҙмәткәрҙәре раҫлауынса, насар хәбәрҙән кеше артыҡ ауырлыҡ йыя икән. Баҡтиһәң, негатив мәғлүмәт ишеткәндән һуң, кеше үҙе лә һиҙмәҫтән борсолоу тойғолары кисерә. Шул рәүешле стресс ҡорбанына әүерелгән кеше юғары калориялы продукттарҙы күберәк ҡуллана башлай. Бындай төркөмгә ҡараусылар насар яңылыҡтарға иғтибар итмәүселәргә ҡарағанда көнөнә 40 процентҡа күберәк ашай икән. Тикшеренеүҙәр Америкала президент һайлауҙары тамамланған осорҙа үткәрелгән. Президент кампанияһы мәлендә иҡтисади хәлдәрҙең насарайыуы, сәйәси хаталар тураһында күберәк һөйләнелә. "Был мәғлүмәттәр кешеләрҙе күберәк калория ҡулланырға мәжбүр итә, сөнки уларҙа эволюцияның миллион йылдары эсендә барлыҡҡа килгән инстинкт уяна. Улар "мәлен файҙаланып, туйғансы ашап ҡал" тигән принципҡа эйәрә һәм калориялы аҙыҡты ауыр көндәр өсөн "запас"ка тинләй. Шуға ла кем артыҡ ауырлығынан ҡотолорға теләй, сәләмәт йәшәү рәүеше алып барығыҙ һәм насар яңылыҡтар тыңламағыҙ", - тип билдәләй профессор Джулиано Ларан.

ХӘТЕРКИТАП



# "ТАМҒАЛЫ ҠАРАҒАЙ" ЯҘМЫШЫ

**1995 йылдың апрель айы ине. Сәйер генә төш күреп уяндым. Күк йөҙө зәп-зәңгәр, бер болот әҫәре лә күренмәй, шундай салт аяҙ, матур көн инде. Һәҙиә инәйемдәр тапҡырында, Аратауҙың итәгендә, бәрхәттәй йәшел үлән өҫтөндә, уҡытыусым Сәғитов Ирек Хаммат улы, уртала - мин, Ғәбитов Исмәғил ағай баҫып торабыҙ. Ҡаршыла мөһабәт Таҡыясусаҡ тауы, бормаланып- бормаланып Нөгөш йылғаһы ағып ята. Ирек Хаммат улы Таҡыясусаҡ тауына текләп ҡарап торҙо ла, миңә: "Сәғүрә (был минең мулла ҡушҡан исемем), һин ошо Таҡыясусаҡ тауы артында онотолоп ҡалған бер әйберҙе табып килтерергә тейешһең", - тине.**

Минең төпкө аңымда иҫке яулыҡҡа төрөлгән ниндәйҙер бик боронғо әйбер юлдың ситендәрәк, ағас төбөндә ятҡан һымаҡ булып урын алды.

Эсемдән генә, Таҡыясусаҡҡа менергә, артына төшә биреп, ағас төбөндә ятҡан ул әйберҙе табырға кәрәк, булдыра алырмынмы икән, тип уйлап торам. Уянып киткәс, был ике ҙур шәхес тиккә генә төшкә кермәйҙер, моғайын, Беренсе Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына делегат итеп һайларҙар әле, тип, төшөмдө яҡшыға юрап та ҡуйҙым. Ысынлап та, юрағаным юш килде. Учалы халҡына ҙур рәхмәтлемен: Беренсе һәм Икенсе Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайҙарында делегат булып ҡатнашырға тура килде. Ирек Хаммат улы менән осрашып һөйләшергә яҙманы, ә бер көн мин уның үлем хәбәрен ишеттем. Шул саҡта теге күргән төшөм иҫкә төштө. "Был яулыҡҡа төрөлгән иҫке әйбер нимәне аңлата икән? Ирек Хаммат улы миңә нимә әйтергә теләгән?" тигән уйҙар башымдан йүгереп үтте. Ул саҡта Учалы ҡалаһының унынсы мәктәбендә эшләй инем. Туған телебеҙ онотолоп бара, тип әйтергә теләнеме икән уҡытыусым, тип, күп кенә башҡорт кластары астым. Ҡыҫҡаһы, ниндәй генә эштәр башҡарһам да, Ирек Хаммат улы ошоларҙы эшләргә ҡуштымы икән, тип уйлай торғайным.

Уҡытыусымдың олатаһы Сәғитов Әбделҡәйүм Сәғит улы, атаһы Сәғитов Хаммат Әбделҡәйүм улы ауылыбыҙҙың арҙаҡлы шәхестәре, уҡымышлы кешеләре булған, репрессия уларҙы һәләк иткән. Ирек Хаммат улы әллә үҙенең атаһы менән олатаһын эҙләргә кәрәк тип әйттеме икән, тип, архивтарға хат яҙып, ауылыбыҙҙың репрессияға эләккән кешеләрен эҙләй башланым. Әллә ниндәй ҙур уңыштарға өлгәшә алдым тип әйтә алмайым. Мин "Сәғитов Ҡәйүм" тип эҙләгәнмен, уның исеме Әбделҡәйүм булған икән. Хәлитов Әнүәр мулла тураһында ғына мәғлүмәт таба алдым. Шулай ҙа тыуған яғыма ҡайтҡан һайын, ололарҙан һорашып, күренекле ауылдаштарым тураһында материалдар йыйырға тырыштым. Нисәмә йылдар инде төпкө аңымдағы иҫке генә яулыҡҡа төрөлгән боронғо әйбер тынғы бирмәй, күңелемде өйкәп тик торҙо. Ә бер көндө ҡайҙан ғына ла, нисек кенә итеп табайым икән ул әйберҙе, бөтөнләйгә тыуған ауылыма ҡайта ла алмайым бит, тип уйланып ултыра инем, күҙҙәремдән йәштәр атылып килеп сыҡты. Шунан Байназар мәктәбендә эшләгән өс туған һеңлем, Әбделҡәйүм олатайҙың ейәнсәре, Ҡотлобаева Көнһылыуға шылтыраттым:

- Көнһылыу, иҫке ҡағыҙҙар араһын ҡара әле. Һеҙҙең өйҙә улар күп ине бит, шулар араһында бер нәмә лә булмаҫҡа мөмкин түгел, - тинем.

Бер-ике көн үткәс, Көнһылыу телефондан шундай тулҡынланған тауыш менән:

- Апай, Ирек ағайым һинең төшөңә кермәнеме? - тип һораны.

- Керҙе, ниндәйҙер задание тураһында һөйләне, - тинем.

- Ҡәйүм олатайымдың 1923 йылда ғәрәп хәрефтәре менән яҙылған ҡулъяҙмаларын, Ирек ағайымдың көндәлеген табып алдым, - тине.

Ирек Хаммат улының әсәһе, Ғәйшә инәй үлгәс, Һәҙиә инәйем бөтә иҫке ҡағыҙҙарҙы өйөнә алып ҡайтҡан булған. Һәҙиә инәйем вафат булғас, ҡағыҙҙар Көнһылыуға килеп эләккән. Көнһылыу менән икәүләп, ғәрәп хәрефтәре менән яҙылған ҡулъяҙмаларҙы Өфөгә ебәреп, кириллицаға әйләндертеп алдыҡ. Ҡулъяҙма олатайҙың солоҡ ҡарағайҙарының хисап дәфтәре булып сыҡты.

Ҡәйүм олатайҙың яҙмаларын уҡып, хайран ҡалдым. Беҙ йәшәгән төбәк борон-борондан мөғжизәле солоҡ ҡарағайҙар иле булған икән! Ә был хисап дәфтәрендә әллә күпме солоҡсоноң исеме һанап кителгән. Мин был яҙмаларҙы Бөрйән районының "Таң" гәзите редакцияһына баҫтырырға бирҙем. Яҙмаларҙы уҡығандан һуң, яҡташтарым ата-бабаларын иҫтәренә төшөрөр, шәжәрәләрен тағы ла бер тапҡыр барлап сығып, тарих төпкөлөнә сумыр, тип ышанам. "Киске Өфө"лә Әғләм Шәриповтың "Солоҡсолар тураһында китап яҙайыҡ" тигән мәҡәләһен уҡығайным, бәлки, был ҡулъяҙмалар яҡташтарыма солоҡсоларҙың исемлектәрен тергеҙергә бер ни тиклем ярҙам итер. Шул заманда йәшәгән дин әһелдәренең дә исемдәре телгә алынған.

Иҫ китерлек: борон ағастарға ниндәй һаҡсыл ҡараш булған! Һәр солоҡ ағасының үҫеп ултырған урыны, ерһыу атамалары, башлап юнған хужаһы, ҡиәфәте, ниндәй ваҡиға, йола менән бәйле кемдән алынғанлығы тасуирлап яҙылған. Һәр бер ағас паспортлаштырылған, тиһәң дә хата булмаҫ. Бөгөнгө көндә телгә алынған ерһыу атамаларының ҡулланылыштан төшөп ҡалғандары ла, әҙ генә өндәре үҙгәртелеп, икенсе төрлөрәк итеп әйтелгәндәре лә барҙыр.

Күпме кеше ҡортсолоҡ менән шөғөлләнгән! Ниндәй егәрле, таһыллы, сос булған ата-бабаларыбыҙ! Өй артында ҡорто барҙың, өй эсендә ҡото бар, икәнен яҡшы белгәндәр шул улар! Һәр береһенең әллә күпме солоғо булғандыр әле. Ҡәйүм олатайҙың үҙенеке генә лә йөҙҙән ашыу булған бит. Тормош бер ваҡытта ла еңел булмаған, ләкин бер кем дә бәхет эҙләп ситкә сығып китмәгән. Ата-бабаларыбыҙ үҙ ерҙәребеҙгә хужа булып, тәбиғәтебеҙ биргән байлыҡтарҙы исрафламай, һаҡсыл файҙаланып, кәсеп иткәндәр, донъя көткәндәр, ғаиләләрен аҫрағандар.

Солоҡсолоҡ - ысын ирҙәр шөғөлө ул. Тыуған яғым Бөрйәндә иң күркәм, ил көҙгөһө ирҙәрҙе ҡарағайға оҡшаталар. Бөтә яҡтан да килгән ирҙәрҙе "тамғалы ҡарағай кеүек бит, башҡаларҙан айырылып тора" тип ебәрәләр. Элек балды күп биргән ҡайһы бер ҡарағайҙарҙы ирҙәр исеме менән атап йөрөткәндәр. Атайымдың Сусҡаморондағы ҡарағайы - Көнәш, Өммөгөлсөм өләсәйемдең атаһы Ғәбитов Мөхәмәтғәли олатайымдың - Ишшар, Ишмөхәмәтов Аллабирҙе олатайымдың Ялан айырында Зәйнекәй исемле ҡарағайҙары булғанын беләм. Ғаиләлә баш бала булғанлыҡтан, ҡустыларым үҫеп еткәнсе, атайым мине ҡарағай ябырға, көҙ булһа, солоҡтан бал алырға үҙе менән йөрөтә торғайны. Бейек, йыуан ҡарағайҙарға атайымдың "ыһ" та итмәй, һеләүһен һымаҡ, етеҙ генә менеп киткәнен иҫем китеп ҡарап торор инем. Уның: "И- и-и ҡыҙым, һин боронғо ҡарағайҙарҙы күрһәң, уларҙың икешәр, өсәр кейәләләре лә була торғайны", - тип һөйләгәне хәтерҙә.

Ҡарағай, имән, ҡарағас ағастары борон-борондан ныҡлыларҙан һаналған. Өйҙөң нигеҙен имәндән, ҡарағастан ҡорғандар, ҡарағайҙан йорт төҙөгәндәр. Тиккә генә абруйлы, ныҡлы ирҙәр имән, ҡарағай менән сағыштырылмаған. Әҙәбиәттә һомғол, зифа буйлы ҡайындар һылыу ҡыҙҙар итеп һынландырыла. Репрессия йылдарында, һуғыш ваҡытында, ҡыҙыу нөктәләрҙә тамғалы ҡарағай һымаҡ ир заттарыбыҙҙы әҙ юғалтманыҡ бит. Бөгөнгө көндә лә алкоголь тигән яуыз күпме ир заттарын, ҡатын-ҡыҙҙарын аяп тормай, ялмай ғына, һәләк итә. Ағастарҙың да, кешеләрҙең дә яҙмыштары бер-береһенә оҡшаш шул.

Бөрйәнгә ҡайтҡанда, ҙур-ҙур йөк машиналарына тейәп оҙатылған йыуан- йыуан ҡарағайҙарҙы күреп, тамырҙарынан, ғаиләһенән айырып, сит яҡтарға һөргөнгә ебәрелгән олатайҙарға оҡшатып, йөрәгем һыҡрана торғайны. Юғары сифатлы ағастар киҫеп алынған ерҙәргә ҡайын, уҫаҡ һымаҡтары үҫеп сыҡты. Тамғалы ҡарағай кеүек ир заттары юғарыла һанап кителгән сәбәптәр менән һәләк булғас, власты ҡайын - ҡатын-ҡыҙҙар ҡулдарына ала башланы...

Ҡәйүм олатайҙың ҡулъяҙмаларын яҙырҙан алда, үҙе тураһында ла һөйләп китергә кәрәктер, тип уйлайым. Мәҡәләмде яҙғанда, Ҡәйүм олатайҙың улы Сәғитов Әхәт бабай мәрхүмдең, ейәне Мырҙағолов Фәрхитдин бабайҙың, килене Хөснитдинова Һәҙиә инәйем мәрхүмәнең һәм башҡа ауылдаштарымдың хәтирәләренә таяндым.

**Шәһүрә ӘХМӘҘИЕВА.**
**Учалы районы.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Күпселек - Тура һыҙатта. Улар ял көндәренең етеүен түҙемһеҙлек менән көтөп ала, күп итеп фильмдар ҡарай һәм шулай итеп дүшәмбегә тиклем үҙенең никтыуҙы икәнлеген онотоп тора.*



АҒИНӘЙҘӘР ҠОРО

**Халыҡ араһында абруй ҡаҙанған, һүҙен һүҙ итерлек ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ бөгөн Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы эргәһендәге "Ағинәйҙәр ҡоро" ойошмаһына берләшеп, әүҙем эшләй башланы. Күптән йылы һүҙгә, иғтибарға, ихтирамға һыуһап йәшәгән ауыл кешеһенә бөгөн матди ярҙам ғына түгел, рухи терәк тә кәрәк булыуын тәүгеләрҙән булып төшөнгән Баймаҡ районы ҡатын-ҡыҙҙары был йәһәттән бөтәһенә лә үрнәк булырҙай. Бөгөн дәүләт ҡоролошо ниндәй, донъялағы хәлдәр, йәмғиәт торошо ҡайһылай булыуға ҡарамаҫтан, беҙ үҙебеҙ үҙ донъябыҙҙы яйға һалырға, тормошобоҙҙо үҙебеҙ ҡорорға, яҙмышыбыҙҙы ҡулыбыҙға алырға тейешбеҙ. Бер быуатта ла башҡорт халҡының ҡул ҡаушырып, битарафлыкта киләсәген уйламай, йәшәйешен ҡайғыртмай йәшәүе күҙәтелмәгән икән, XXI быуатта ла бар халыҡты ялмап алған ғәмһеҙлектән арынырға ярҙам итергә кәрәк. Бына ошо бурысты иңдәренә һалған бөгөн ағинәйҙәр. Күптән инде хаҡлы ялда булыуға ҡарамаҫтан, әле лә халыҡ менән эшләүен дауам иткән, кәрәк саҡта һүҙ менән дә, эше менән дә ярҙам итеп ебәрергә әҙер торған милләттәшебеҙҙең береһе, Баймаҡ районының "Йыл ағинәйе" исеменә лайыҡ булған Рәйсә апай Диярованың һөйләгәндәрен тыңлайыҡ.**

# ҠАРТЛЫҒЫНДА...

## йән тыныслығына өлгәшеү өсөн эшлә



- Беҙҙең Ҡолсора ауыл Советы биләмәһе Ҡолсора, Муллаҡай, Үрге Иҙрис, Түбәнге Иҙрис ауылдарын берләштереп тора. Муллаҡай ауылы билдәле дин әһеле, суфый, яҙыусы һәм шағир Ғабдулла Сәйдинең тыуған төйәге. Түбәнге Иҙрис Ғәбит Арғынбаев сәсәнде биргән ауыл. Беҙгә ошондай зыялы шәхестәребеҙҙең рухтары ярҙам итә. Шуға күрә, беҙҙең ошо бәләкәй генә ауылдарҙың дүртеһендә лә мәсеттәр эшләп тора, аҙан тауыштары тынмай. Мәсеттәргә йәштәребеҙ ҙә йөрөй, балаларҙы ла ылыҡтырабыҙ. Мәсеттә ойошторолған уҡыуҙарға йәштәрҙең ихлас йөрөүе айырата ҡыуандыра, тиҙ генә дингә бирелеп китмәһәләр ҙә, яҡшылыҡҡа ынтылыуҙары, әхлаҡлы булыуҙы өҫтөн күреүҙәре мөһим. Йәштәр ауылдарыбыҙҙа үткән бөтөн сараларҙа ла ҡатнаша, ҡулынан килгәне матди ярҙам да күрһәтә. Былтыр Ҡорбан байрамында дүрт ауылдың да байрам табынын башлап ҡына фермер хужалығы ойоштороп йөрөүсе Рәмил Мөхәмәтйәнов һарыҡ ите менән тәьмин итте. Ҡолсора ауылында Ололар көнө айҡанлы ойошторолған сараға Шәкирйән Мостафин матди ярҙам күрһәтте.

Ун йыллыҡ мәктәпте тамамлағас, хеҙмәт юлым һарыҡ көтөүҙән башланғайны. Шунан клуб мөдире, китапханасы булып бер аҙ эшләгәс, колхоздың сусҡа малын ҡараным. Ситтән тороп юғары белем алдым. Һуңынан баш экономист, колхоз рәйесе булып эшләнем. Шуға күрә мин халыҡтан бер ваҡытта ла айырылманым, тығыҙ аралашып йәшәнем, һәр кемде яҡшы беләм. Әле лә, йыш булмаһа ла, һәр береһенең хәл-әхүәлен белешеп торорға ваҡыт табам. "Мин ағинәймен", тип әйтмәһәм дә, бөтәһе лә мине белеп тора, аҡ яулыҡ та, танытма ла, сәхнәгә сығыу ҙа, доклад та кәрәкмәй, уларға һинең килдәкеэшең кәрәк. Әгәр ҙә һине халыҡ хөрмәт итә икән, һин дә уларға ихтирам менән ҡарарға тейешһең. Береһе тураһында, эсеп йөрөй, урамда ята ине, тигән һүҙ сыҡһа, эскән кешене гәйеплә́ргә ашыҡмайым, әсерсгән кешене ҙрләйем. Берәү нимәнелер урлай икән, уны битәрләргә була ул, тик гәйеп урланғанды һатып алыусыла булыуын онотмаҫҡа кәрәк. Бер-беребеҙҙең балаларын шулай үҙебеҙ боҙабыҙ, ағыулайбыҙ. Шуға күрә, йәштәргә тик үҙ өлгөһөндә яҡшы һабаҡтар бирә алған ҡатын-ҡыҙ ғына "Ағинәй" тип аталырға хаҡлы.

Башҡорт теленд сыҡҡан ваҡытлы матбуғатҡа даими рәүештә яҙылып барабыҙ. Үҙебеҙгә "Йәшлек", "Киске Өфө", район гәзиттәрен, балалар өсөн "Аҡбуҙат", "Шоңҡар", "Аманат" журналдарын алдырабыҙ. Улым да, киленем дә уҡытыусылар. Егерме йыл ҡәйнә булып, килен менән бергә йәшәйем, әлхәмдулиллаһ, киленем ҡайырып бер һүҙ әйткәне юҡ. Йәштәрҙе аңлау өсөн бары тик үҙеңде уның урынына ҡуйып ҡарап, үҙеңдән: "Уның йәшендә мин нимә белә инем?" - тип һорарға кәрәк. Бер тапҡыр нимәнелер дөрөҫ эшләмәне икән, өңдәшмәй ҡалам да, аҙаҡ һүҙ араһында ғына аңлатып, ярҙам итәм. Улым менән киленем өс ул һәм бер ҡыҙ үҫтерҙеләр, оло улыбыҙ быйыл юғары уҡыу йортона уҡырға инде. Бала тәрбиәһендә өләсәй кешенең ролен юғары баһалайым, ейән-ейәнсәрҙәремде үҙем бағыштым. Улым да тәртипһеҙ түгел, тәмәке тартмай, эсмәй. Киленемә, балаларҙың туған көндәрендә дуҫтарығыҙҙы балалары менән бергә саҡырып, йыйылып, матур итеп һөйләшеп ултырығыҙ, тик өҫтәлдә эске булмаһын, тип әйтеп ҡуйғанмын. Сөнки аҙаҡтан һуң булыр, балалар, үҙегеҙ шулай итә торғайныгыҙ бит, тип тыңламай ҡуйыр. Шундай йәмғиәттә йәшәгәс, тотошлай тыйып булмай, ләкин балаларҙы тыям тиһәң, эште ата-әсәһенән башларға кәрәк.

Ғөмүмән, мәсет, "Ағинәйҙәр ҡоро", "Аҡһаҡалдар ҡоро" ауылдарҙы тотоп тора беҙҙең районда. "Ағинәйҙәр ҡоро" ойошмаһы әлектән килгән тәртип буйынса эшләп килә. Ниндәй эшкә тотонор алдынан да дүрт ауылдың ағинәйҙәре, ҡатын-ҡыҙҙар советы ағзалары һәр ваҡыт үҙ-ара кәңәшләшеп алабыҙ. Муллаҡай ауылында элек уҡытыусы, хәҙер китапханасы булып эшләгән Гүзәл Рахманҡолова, Түбәнге Иҙристән Әлфирә Ҡаһарманова һәм Рауза Сынғыҙова, Үрге Иҙристән Рәмзиә Ҡаҙаҡбаева, Ҡолсоранан Рәйсә һәм Зөлхизә Һамарбаевалар, Рауза Ғафарова, Гөлйемеш Баязитовалар кеүек халыҡ араһында абруйлы, һүҙҙәре үткәндәй ҡатын-ҡыҙҙар менән ауылдарҙағы төрлө мәсьәләләрҙе хәл итергә тырышып йөрөйбөҙ. Ҡолсора ауыл биләмәһе башлығы Фирүзә Арғынова ла беҙгә һәр яҡлап ярҙам күрһәтеп, инициативаларҙы хуплап ҡына тора. Эскән йәш ғаиләләргә күп осраҡта мин барам. Фирүзә Иштуған ҡыҙы, берәй депутат менән өсәүләп тә йөрөйбөҙ. Аллаға шөкөр, берәүҙең дә балаһын ата-әсә тәрбиәһенән мәхрүм итеп, тартып алғаныбыҙ юҡ. Сөнки баланы туған тупрағынан, тыуған йортонан, ата-әсәһенән айырып алыу баҡсала тәрбиәләп үҫтергән ағасты тау башына алып барып ултыртыуға тиң.

Ауылдар яйлап бөтә, йәштәр ситкә китә, ауыл кешеһенең бәйеле аҙҙы, тип йыш зарланабыҙ. Әммә нисек кенә булһа ла ауыл бөтмәй ул, булғаны менән кеше йәшәргә тырыша. Шулай ҙа хөкүмәт тарафынан ярҙам булмайынса, фермерлыҡ, шәхси хужалыҡтар ярҙамында ғына ауылда үҫеш көтөп булмай. Ауыл кешеһенең тормошо уғата ауыр, яңы сығарылған закондар ҙа уны еңелләштермәй. Элекке данлыҡлы "Октябрҙең 50 йыллығы" исемендәге колхозға ҡараған ерҙәрҙең бөгөн бер гектары ла сәселмәй. Ер тапалды, ҡатты - ултырып иларлыҡ. Элек күҙ аҙағына тиклем күпме һалам күбәләре ултырыр, һөрөп бөтөлмәгән ерҙе эшкәртергәр, малдарҙы кәртәгә индерәбеҙ тип йүгереп йөрөрҙәр ине. Ир-егеттәребеҙ Себерҙән ҡайтып, айығып, ең һыҙғанып тормош көтә башлаһа, атайлыҡ дәрәжәһе күтәрелһә, бәлки, йәшәйеш яйға һалыныр.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тыныслыҡ һәм бер нәмә лә эшләмәү - бер үк нәмә түгел, тиҙәр. Ысынлап та, йән тыныслығы ул эшләгән, йәмғиәттәге хәл-ваҡиғаларға битараф ҡалмаған кешегә генә биреләләр ул. Ошондай фекерҙә Рәйсә Ғәли ҡыҙы. Ҡартлығымда йәнем тыныс булһын, тип, йүгерә алған саҡта йүгерергә, ҡулыңдан килгәнде эшләп өлгөрөргә кәрәк, ти ул.**

Сәриә ҒАРИПОВА
яҙып алды.

УҢЫШ ҠАҘАН



# НИ ӨСӨН ҺЕҘ АУЫРЫУ ҺӘМ ЯРЛЫ?

## Ҡорбан комплексынан нисек ҡотолорға?

Ошо 10 сәбәп кешеләрҙе ауырыу һәм ярлы итә лә инде. Уларҙың береһе генә йәки бер-нисә комбинацияла булыуға ҡарамаҫтан, һеҙөмтә бер үк - һеҙ көн һайын бәхетле һәм ҡәнәғәт йәшәү урынына, бер төрлө, күңелһеҙ тормош кисерәһегеҙ. Ә был - енәйәт. Һеҙгә был юлға баҫырға ярамай.

Шуға күрә сәбәптәр исемлеген тағы бер ҡат уҡып, унда үҙегеҙгә хас пункттарҙы табығыҙ - был уларҙан арыныуға бер аҙым булып тора. Сөнки табыу менән һеҙ уларҙы хис-тойғо ярҙамынан мәхрүм итәһегеҙ.

Әммә быны еңеп сығыр өсөн бала саҡта һалынған программаны, төпкә аң кимәлендә һаҡланған инаныуҙарҙы ҡабаттан ҡарап, анализларға тейешһегеҙ. Тап ошо инаныуҙар үҙегеҙ менән булған барлыҡ нәмәләрҙе нисек ҡабул итеүегеҙгә йоғонто яһай ҙа инде. Улар һеҙ нимә көтәһегеҙ, шуларҙы тормошҡа ашыра.

Моғайын, тормошоғоҙҙа ҡулсаға әйләнгән өс программаның береһен тормошҡа ашыраһығыҙҙыр. Бына улар:

● Мидас ҡағылыуы - нимәгә генә ҡағылһығыҙ ҙа ул алтынға йәки платинаға әүерелә.

● Тура һыҙат - һәр көнөгөҙ тыныс ҡына өмөтһөҙлөктә үтә.

● Төпһөҙ соҡор - тормошоғоҙ даими рәүештә спираль буйынса аҫҡа тәгәрәй; драмалар, йәрәхәттәр, фажиғәләр бер-бер артлы килеп кенә тора.

Күптәр өс циклда ла аҙлап ҡына ҡатнаша, әммә күпселек ғүмеренең оҙайлы ваҡытын бер циклда үткәрә. Бик һирәктәр генә Мидас ҡағылыуы циклында тора; күпселек - Тура һыҙатта. Улар ял көндәренең етеүен түҙемһеҙлек менән көтөп ала, күп итеп фильмдар ҡарай һәм шулай итеп дүшәмбегә тиклем үҙенең никтыуҙы икәнлеген онотоп тора. Аҙсылыҡ Төпһөҙ соҡорҙа ултыра, әммә уларҙың һаны ла арта бара. Улар уңышһыҙлыҡ артынан уңышһыҙлыҡ көтөп йәшәй һәм һәр саҡ тормоштоң насарлығына, ә алда бары тик үлем көтөүенә инана. Бындай кешеләр һәр ваҡыт үҙҙәрен хәл-торош ҡорбаны тип һанай. Эйе, килем, социаль хәл, белем, тәрбиә, мөхит, ғаилә һәм башҡа бик күп шарттар һеҙҙең был тормошта ниндәй урын биләүегеҙгә йоғонто яһай, ҡайһы бер осраҡта уны билдәләй. Әммә был хәл-торошто кем тыуҙыра?

Үҙҙәренең уңышһыҙлыҡтарын анализлап һәм бәхетһеҙ булыуҙары тураһында һығымта яһап, кешеләр бик мөһим бер мәлде иҫәпкә алмай: ошо хәл-торош, шарттар тураһындағы фекерҙәрен.

Үҙенең "Фекерләү ғәҙәте" китабында Джеймс Аллен, аңыбыҙ баҡса кеүек, уны йә сүп үләндәренән таҙалап, утап торорға кәрәк, йә уны сүп баҫа, ти. Нисек кенә булмаһын, аң - бәрәкәтле тупраҡ. Әгәр һеҙ аңлы рәүештә уға кәрәкле орлоҡ һалып, тәрбиәләп, таҙартып торһағыҙ, ул һеҙҙе гөлбаҡса, емеш-еләк менән ҡыуандырыр. Әгәр инде ташлап ҡуйһағыҙ - ҡый менән тулыр.

Рэнди ГЕЙДЖ.



## 26 ЯНВАРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.25 "Женский журнал".
12.55 "Мосгаз". Сериал (16+).
14.20, 15.15, 23.45 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00, 03.40 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Тест на беременность". 1-я и 2-я серии. Сериал (16+).
23.30 Ночные новости.
00.40 "Проверь себя" (12+).
01.40 "Наедине со всеми" (16+).
02.35, 03.05 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Диалог со смертью Переговорщики" (12+).
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Сердце звезды". Сериал (12+).
16.00 "Последний янычар". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Бедные родственники". Мелодраматический сериал. 12-я серия (12+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Косатка". Детективный сериал (12+).
23.40 "Крым. Приятное свидание".
00.45 "Профессия - следователь". Сериал (12+).
02.15 "Горячая десятка" (12+).
03.20 "Комната смеха".
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.40 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Еңмеш". Фильм (0+)
20.00 "Тәмле" (6+)
21.00 "Кисултырып". Азалия һәм Урал Рәшитов (6+)

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00, 11.15 Новости недели (16+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Городок АЮЯ".**
**11.00, 16.15 "Замандаш" (6+).**
**12.00 Диспут-клуб "Пятый угол" (12+).**
**12.45 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бахетнэмэ".**
**13.30, 14.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.45 "Мелодии души".**
**14.15 "Учим башкирский язык".**
**14.45 "Живое село" (12+).**
**15.15 "Царь горы".**
**15.45 "Гора новостей".**
**15.45 "Бауырһаҡ".**
**16.00 "Борсаҡ".**
**16.30 Новости (на русск. яз.) (6+).**
**16.45 "КЛИО".**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Чужое лицо". Сериал (12+).**
**18.30, 22.30 Новости (12+).**
**18.45 Хоккей. КХЛ. Прямая трансляция (12+).**
**21.30 Новости (на русск. яз.) (12+).**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**23.00 Время спорта.**
**23.30 "Дознание" (16+).**

## 27 ЯНВАРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Тест на беременность". Мелодраматический сериал (16+).
14.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет". Продолжение (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Тест на беременность". 3-я и 4-я серии. Сериал (16+).
23.35 Ночные новости.
23.50 "Время покажет" (16+).
00.45 "Проверь себя" (12+).
00.45 "Наедине со всеми" (16+).
02.40 "Модный приговор".
03.00 Новости.
03.05 "Модный приговор".
03.40 "Мужское/Женское" (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз" (12+).
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Сердце звезды". Сериал (12+).
16.00 "Последний янычар". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Бедные родственники". 13-я серия. Мелодраматический сериал (12+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
201.00 "Косатка". Детективный сериал (12+).
23.45 "Моя блокада" (16+).
00.45 "Профессия - следователь". Сериал (12+).
02.15 "Русский след Ковчега завета" (12+).
03.15 "Комната смеха".
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.40 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 Салауат Низаметдинов. Концерт (6+)
20.00 "Дарман" (6+)
21.00 "Кис ултырып". Фәрүәз Урманшин (6+)

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильмы.**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Зеркальце".**
**11.00, 16.15 "Замандаш" (6+).**
**11.15 "Орнамент".**
**11.30 Новости.**
**11.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**12.30, 18.30 Новости (12+).**
**12.45 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.30, 14.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.15 "Учим башкирский язык".**
**14.45 "Башҡорттар".**
**15.15 "Семәр".**
**15.45 "Йырлы кәрәҙ".**
**16.00 "Ғәләмәт донья".**
**16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.) (16+).**
**16.45 "Дорога к храму".**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Чужое лицо". Сериал (12+).**
**18.45, 20.00 "Телецентр".**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**21.00 "Полезные новости" (16+).**
**21.15 "Специальный репортаж" (12+).**

## 28 ЯНВАРЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Тест на беременность". Сериал (16+).
14.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Тест на беременность". 5-я и 6-я серии. Сериал (16+).
23.35 Ночные новости.
23.50 "Время покажет" (16+).
00.45 "Проверь себя" (12+).
00.45 "Наедине со всеми" (16+).
02.40 "Модный приговор".
03.00 Новости.
03.05 "Модный приговор".
03.40 "Мужское/Женское" (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Кузькина мать. Итоги". "Мертвая дорога" (12+).
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Сердце звезды". Сериал (12+).
16.00 "Последний янычар". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Бедные родственники". Мелодраматический сериал (12+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Косатка". Детективный сериал (12+).
22.50 "Русская Антарктида. XXI век".
00.45 "Профессия - следователь". Сериал (12+).
02.20 "Кузькина мать. Итоги" (12+).
03.20 "Комната смеха".
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.40 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Урал моңо-2014". Концерт (6+)
21.00 "Кис ултырып". "Арғымаҡ" төркөмө (12+)

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильм.**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Книга сказок".**
**11.00, 16.15 "Замандаш" (6+).**
**11.15 "Орнамент".**
**11.30, 13.30, 14.30 Новости.**
**11.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**12.30, 18.30, 22.30, 21.30 Новости (12+).**
**12.45 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 Поет Р.Шагбалов (12+).**
**14.15 "Учим башкирский язык".**
**14.45 "Тәмле" (12+).**
**15.15 "Физра" (6+).**
**15.45 "Шатлык йыры".**
**16.00 "Борсаҡ".**
**16.30 Новости (на русск. яз.) (6+).**
**16.45 "Здоровое решение".**
**17.15 Позывной "Барс" (12+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Чужое лицо". Худ. фильм (12+).**
**18.45 Хоккей. КХЛ. Прямая трансляция (12+).**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**

## 29 ЯНВАРЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Тест на беременность". Сериал (16+).
14.25, 15.15, 23.50 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00, 03.45 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 01.45 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Тест на беременность". 7-я и 8-я серии (16+).
23.35 Ночные новости.
00.45 "На его месте мог быть я" (12+).
02.40, 03.05 "Модный приговор".
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.05, 07.35, 08.05, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Сердце звезды". Сериал (12+).
16.00 "Последний янычар". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Бедные родственники". Сериал (12+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Косатка". Сериал (12+).
22.50 "Специальный корреспондент" (16+).
00.30 "Красота по-русски" (16+).
01.30 "Гонки по вертикали". Сериал.
03.00 "Профессия - следователь" (12+).
03.55 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.40 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Дуҫлыҡ күпере". Концерт (6+)
21.00 Раис Низаметдинов. Концерт (6+)

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильмы.**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Царь горы".**
**11.00, 16.15 "Замандаш" (6+).**
**11.15"Орнамент".**
**11.30, 16, 30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**12.30, 18.30 Новости (12+).**
**12.45 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бэхетнамэ".**
**13.30, 14.30 Новости.**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.15 "Учим башкирский язык" (12+).**
**14.45 "Үткән ғүмер" (12+).**
**15.15 "Шәп арба".**
**15.45 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**16.00 "Семәр".**
**16.45 "Алтын тирмә".**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Чужое лицо" (12+).**
**18.45, 20.00 "Телецентр".**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.45 Полезные новости.**
**21.00 "Наука 102" (12+).**
**22.00 "Аль-Фатиха".**
**22.30 Новости (на башк. яз.) (6+).**
**23.00 ФК "Уфа" наша команда!**

## 30 ЯНВАРЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00, 15.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Тест на беременность". Сериал (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.50 "Поле чудес" (16+).
21.00 "Время".
21.35 "Три аккорда" (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.25 "Илья Кабаков. В будущее возьмут не всех" (16+).
01.30 "Омен-3". Фильм ужасов (18+).
03.35 "Начинающие". Худ. фильм (12+).
05.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00 "Утро России".
06.10, 06.35, 07.10, 07.35, 08.05, 08.35 "Вести-Башкортостан".
08.55 "Мусульмане".
09.10 "От всей души" (12+).
10.05 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (12).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Сердце звезды". Сериал (12+).
16.00 "Последний янычар". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-ПФО".
17.30 "Бедные родственники". Сериал (12+).
18.30 "Прямой эфир".
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Главная сцена". Музыкальное шоу (16+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
00.50 "Превратности судьбы". Мелодрама (16+).
02.50 "Веришь, не веришь".
04.30 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.40 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Моңло аҙан". Дини йырҙар (0+)
17.00 "Наҙға төрөнөп". Хәлимә Ғәббәсова концерты (6+)
20.00 "Ҡотлауҙар" (6+)
21.00 "Кис ултырып". "Наза" дискотекаһы. (6+)

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильмы.**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Ғәләмәт донья" (0+).**
**11.00, 16.15 "Замандаш" (6+).**
**11.15, 17.45 "Орнамент".**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**11.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**12.30, 22.30, 00.45 Новости (12+).**
**12.45 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.30, 14.30, 18.30 Новости.**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.15 "Учим башкирский язык".**
**14.45 "Автограф" (13+).**
**15.15 "Зеркальце".**
**15.45 "Сулпылар".**
**16.00 "Байтус" (6+).**
**16.45 ФК "Уфа" - наша команда! (12+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры (16+).**
**18.00 "Йома".**
**18.45 Хоккей. КХЛ. Прямая трансляция.**
**22.00 Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "Дарман" (12+).**
**23.45 "Смелая музыка". Худ. фильм (12+).**
**01.15 "Дикое поле" (12+).**
**02.30 Б.Бикбай "Сваха" (12+).**

## 31 ЯНВАРЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Орел и решка".
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Виктор Косых. Не бейте его, это артист!" Док. фильм (16+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.10 "Вышел ежик из тумана..." (16+).
17.05 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Угадай мелодию" (12+).
19.00 "Театр эстрады" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
23.10 "Нерассказанная история США" (16+).
00.20 "Возлюбленные". Мелодрама (16+).
02.55 "Черные небеса". Худ. фильм (16+).
04.50 "Мужское/Женское" (16+).

### РОССИЯ 1

05.10 "SOS" над тайгой" (6+).
06.35 "Сельское утро".
07.05 "Диалоги о животных".
08.00 "Вести".
08.10 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Военная программа" Александра Сладкова.
08.50 "Планета собак".
09.25 "Субботник".
10.05 "Качество жизни".
11.00 "Вести".
11.10 "Вести-Башкортостан".
11.20, 14.30 "Костер на снегу". Сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
15.40 "Субботний вечер" (12+).
17.35 "Петросян-шоу" (16+).
20.00 "Вести в субботу" с Сергеем Брилевым.
20.45 "Гордиев узел". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
00.25 "Красавица и чудовище". Мелодрама (16+).
02.40 "Назначение".
04.30 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.40 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Миҙгелдәр". Нурия Абдуллинаның концерты (2012й.) (6+)
18.00 "Супер киленсәк". Фильм (6+)
21.00 "Был тылсымлы донъя". Гөлсөм Бикбулатова(6+)

### БСТ

**07.00, 12.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.15 "Речной патруль".**
**09.30 "Здоровое решение" (12+).**
**10.00 "КЛИО" (6+).**
**10.45 "Большой чемодан" (12+).**
**11.30 "Аль-Фатиха" (6+).**
**12.00 "Следопыт".**
**12.45, 01.45 "Нэзер" (12+).**
**13.30 "Орнамент" (6+).**
**13.45, 19.30 "Весело живем" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (0+).**
**16.00 "Обитаемый остров" (16+).**
**18.00 "Позывной "Барс" (12+).**
**18.15 "Хазина".**
**18.45 "Замандаш" (6+).**
**19.00 "Башҡорттар".**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Башҡорт йыры" представляет… (12+).**
**20.30 "Живое село" (12+).**
**21.00 "Бизнес-сфера".**
**21.30 Новости (на русск. яз.) (12+).**
**22.00 "Попкорм" (16+).**
**22.30 Новости (на башк. яз.) (16+).**
**23.00 "Башкорт-йыры-2014".**
**02.30 Н.Абдыкадыров. "Последнее море Чингисхана" (12+).**
**04.15 "Обитаемый остров" (12+).**
**06.15 "Телепутеводитель" (12+).**

## 1 ФЕВРАЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Версия полковника Зорина". Худ. фильм (12+).
08.10 "Служу Отчизне!".
08.45 "Смешарики". "Пин-код".
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым (12+).
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Теория заговора".
13.15 "Пираты Карибского моря: на странных берегах". Приключения (16+).
1545 "Игорь Матвиенко. Круто, ты попал..." (12+).
16.50 "ДОстояние Республики".
18.40 "Клуб веселых и находчивых". Высшая лига. Финал (16+).
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Точь-в-точь".
23.55 "Прислуга". Драма (16+).
02.35 "Прима из клана сопрано" (12+).
03.35 "Мужское/Женское" (16+).
04.30 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.25 "Русское поле" (16+).
07.20 "Вся Россия".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному".
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.10 "Кулинарная звезда".
12.10 "Ищу тебя". Худ. фильм (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 "Смеяться разрешается".
16.15 "Красотки". Мелодраматический сериал. 4 серии (12+)..
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер" с Владимиром Соловьевым (12+).
23.50 "Частный детектив Татьяна Иванова". "Бес в ребро". Детективный сериал (12+).
01.45 "Сумасшедшая любовь". Худ. фильм (16+).
03.40 "Моя планета" представляет". "Земля Героев. Урал-батыр", "Чудеса России. Валаам. Земля Бога".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.00 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.40 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
11.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.40 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Минең ғаиләм". Спектакль (6+)
18.00 "3:0". Рәил Өмөтбаев (6+)
20.00 "Ҡотлауҙар" (6+)
21.00 "Кис ултырып". Илсур Тайсин (6+)

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Йома".**
**08.30 "Приключения маленького вождя".**
**10.00 "Физра. Спортблог спецкора" (6+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Ал да гуль" (6+).**
**11.00 "Шәп арба".**
**11.45 "Алтын тирмә".**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.) (12+).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Үткән ғүмер" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму".**
**16.30 "Обитаемый остров: схватка" (12+).**
**18.00 "История признания" (6+).**
**18.15 "Орнамент" (6+).**
**18.30 "Абзялил".**
**18.45 "Замандаш" (6+).**
**19.00 "Наука 102" (12+).**
**19.30 "Историческая среда" (12+).**
**20.00 "Любимое дело" (12+).**
**20.30 Диспут-клуб "Пятый угол" (16+).**
**21.15 "Бизнес-обзор" (12+).**
**21.30 Новости недели (12+).**
**22.30 "Баик" представляет… (12+).**
**23.30 "Вечер.com" (12+).**
**00.15 "Свидание с джазом" (12+).**

ӘЙТЕШ

# НИҢӘ ИКӘН УРАЛДАН



## Ҡыш ҡаса йылдың-йылы?

**"Кем замандың геройы?" тигән һорау ҡуйып, йыл башында "Бәйләнештә" сайтының "Башҡорт ҡатын-ҡыҙы" битендә әйтеш башлап ебәргәйнек һәм гәзитебеҙҙең 3-сө һанында унда ҡатнашыусыларҙың яҙғандары баҫылып сыҡты. Һәр автор ҡуйылған һорауға матур итеп яуап бирергә, заман геройының портретын күҙаллатырға тырышты. Уларға бына Айытҡужа атлы сәсән смс-хәбәр аша башҡа юҫыҡтағыраҡ фекере менән килеп ҡушылды.**

**АЙЫТҠУЖА:**
Һорауығыҙ аңлашылмай.
Герой - була ул нисек?
Һеҙгә һорарға булмаймы
Кем тип арҙаҡлы шәхес?
Бәшмәк кеүек ҡалҡып тора,
Замананың геройы.
Аҙаҡ ҡырын эше ҡалҡа -
Булған заман убыры.
Илем, ерем тиеп янған,
Туған халҡын яҡлаған,
Тура әйтеп ярамаған,
Түбәләнгән, туҡмалған -
Шул шәхестең аҫылы,
Башҡортомдоң сағылы.
Илем тиеп янғанды,
Типкеләйҙәр, бысалар.
Киләсәктә ил аҫылын
Халыҡ үҙе баһалар.
Беләм тимә шәхесте,
Яңғыҙ баһа нуль булыр.
Бар кеше лә әүлиә ул,
Халыҡ һүҙе күл булыр.

**Шиғри диалогты алып барыусы Көфө сәсән һәм Өшөрә сәсәниә ваҡыты-ваҡыты менән әңгәмә юҫығын төрлө темаларға, йылдың билдәле ваҡиғаларына бәйле үҙгәртеп торасаҡ, тип әйткәйнек инде. Был юлы Көфө сәсәндең фекер ебен дауам итәйек.**

**КӨФӨ:**
Һүҙҙәрең, Айытҡужа,
Һалды башымды уйға.
Нисек булыр иртәгә?
Халыҡ үҙе билдәләр.

Бәндәбикә, Көнбикә,
Алтынбикә, Нурбикә.
Ят күңелен уйлауҙы
Ситен күргән Йәнбикә.

Герой янда йөрөй, ти
Кордонград башҡорто.
Шөш давайлай геройҙы
Хәҙер атап биреүҙе.

Тынғыһыҙ йән Өшөрә
Бизнесҡа төшөндөрә.
Маһирыбыҙ Йәнһылыу
Өшөрә хаҡ, ти һылыу.

Аңлата Аҡһаҡ кейек:
Берләшеү кәрәк, тиеп.
Илһамлы ҡанатыбыҙ,
Яҡшы өммәт затыбыҙ!

...Тыңланым барығыҙҙы,
Зыңлаған заңығыҙҙы.
Битараф түгелһегеҙ,
Ғәм тулы күңелегеҙ.

Барыһын аңлаттығыҙ,
Йәнемде ҡанаттығыҙ.

Һеҙ барында халҡыбыҙ
Киләсәккә талпыныр.

Хуплайым һүҙегеҙҙе,
Индерәм үҙегеҙҙе
Арҙаҡлылар рәтенә,
Шәхестәр әрәтенә.

...Китәйек бер башлағас,-
Илгә оран ташлағас.
Яуап кәрәк һорауға:
Ниңә икән Уралдан
Ҡыш ҡаса йылдың-йылы?
Ғинуарҙа хәҙер йылы.

Бер йоҡлай башлағастар,
Уяналар ағастар,
Йоҡламағас ҡыйындыр -
Ауырыйҙар ҡайындар...
Йоҡламай тайыш табан,
Барабыҙ ҡайҙа табан?

Уралдан ҡыш ҡасҡанға
Ғәйепләме үҙебеҙ?
Яйлап-яйлап беҙгә лә
Сүллек килә түгелме?
Дуҫтарым, ошо хаҡта
Көтәмен һеҙҙән һүҙҙе?

**Шулай итеп, кемгә уңайлы, Көфө сәсән тәҡдим иткән тема буйынса әйтеште "Бәйләнештә" сайтының "Башҡорт ҡатын-ҡыҙы" битендә дауам итә ала. Шулай уҡ әйтеште кеҫә телефоны аша СМС менән ебәрә алаһығыҙ: +7-937-835-34-74. "Киске Өфө"-нөң электрон почтаһы ла һеҙҙең ҡарамаҡҡа: kiskeufa@ufacom.ru. Текстарҙың 1-6 куплеттан тороуы, бирелгән теманан ситкә китмәҫкә кәрәклеге тураһындағы шартыбыҙҙы тағы ҡабатлайбыҙ. Псевдонимығыҙҙы ҡуйырға ла онотмаһағыҙ ине.**

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# БЕЛГӘН ЙОҪОҠҠА, ОНОТОП БАРАБЫҘ...

**Беҙҙең Салауат районында йәшәгән башҡорттар һөйләшендә урын алған ҡайһы бер һүҙҙәр:**

**Индек** - кәртәләп алынған урынға, кереп-сығып йөрөр өсөн, ҡулайлаштырылған алынмалы кәртәлек

**Муйынсаҡ** - яңы тыуған быҙауға сепрәктән, ҡорамалап, муйынына тағыр өсөн тегелгән әйбер; этте сипләп ҡуйғанда, муйынына кейҙерелгән ҡайыш ҡулайлама

**Ҡоршау һуҡмағандар ҙа** - берәү ҙә тыймаған, рөхсәт алыу кәрәкмәй

**Бумала** - йүкә ҡайырынан һыҙырылған һалабашты, өлөштәргә бүлеп, бөкләп, бер нисә урындан ыҡсым итеп бәйләп, өй аҡлау өсөн эшләнгән ҡулайлама.

**Туҡмаҡ** - элек керҙе йылға буйында сайҡағанда, яҫы ағас ярҡаһынан эшләнгән һаплы ҡулайлама ярҙамында, әйләндереп-тулғандырып, һабынын (һелтеһен) сығарыу өсөн, туҡмай торғайныҡ

**Һелте** - кер йыуғанда, мунсала йыуынғанда, һабын урынына тотонолған, көлгә йылы һыу һалып эшләнгән, төнәтмә (урыҫса: щёлочь)

**Моса төшөр кәрәк** - "мунса инер кәрәк" тигән һүҙ, мунса тигәнде "моса" тиҙәр

**Ҡашыяҡ йыуа** - һауыт-һаба йыуа

**Донъя булғас, ҡашыяҡ-һауыт шылтырамай тормай инде** - төрлө сағы була донъя көткәндә

**Шай, шикелде** - шикелле

**Һыйыҡ** - шыйыҡ ("Өйө бейек - үрәһе һыйыҡ" тип иҫәпсел, һаран кеше хаҡында әйтәләр)

**Үрә** - өйрә (бәләкәй саҡта мин һөт үрәһен ярата инем)

**Аймылыша** - яңылыша, өлкәнәйгән кеше, сир аяҡтан йыҡһа, күп нәмәне аңламай башлай

**Һайҙана** - элек, аслыҡ йылдарында, ағыулы башаҡ йә мәшкәк ашап, аңдары томаланып, иҫтәре яңылышып киткән осраҡта әйткәндәр

**Мәшкәк** - бәшмәкте ҡатнәйҙәр шулай ти ине элек

**Хәс тә, хас та** - нәҡ, кеүек.

**Мат итә** - интектерә, ҡаңғырта, маҙаһыҙлай

**Хәштрүше әйҙәнгән** - ҡотһоҙланған, йәме киткән

**Килеп утырам** (килеутрам) - "килә ятам", тиҙәр көньяҡ башҡорттары

**Ҡапҡорһаҡ** - эсе күпкәк, күп ашарға яратҡан кеше

**Бухмантай** - йыуантыҡ, йоморо̆ҡас баланы, яратып, шулай тиҙәр

**Оңҡот** - бер нимәһе юҡ, хәйерсе

**Этекәш, өшөкәс** - һыу ингәндә, һалҡын һыуға ингәндә, шулай тибеҙ

**Ытырғаныр** - сикәнеп, сирҡаныр

**Ҡорғаҡһыған** - ныҡ һыуһаған кеше; ағас мискәнең һыуы бөтөп ултырһа, гөлдәргә оҙаҡ һыу һибелмәһә

**Миңһылыу АБДУЛЛИНА.**

**(Дауамы бар).**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КӘЗӘНЕҢ МАЛЛЫҒЫ...

## бажаның кәрҙәшлеге

Берәүгә күтәргән таяғың үҙеңә төшөр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Сит кешенең серен асыу - хыянат, үҙеңдең сереңде асыу - ахмаҡлыҡ.

**(Ф. Вольтер).**

Үҙеңдән көнләшеүселәргә ғазап бүләк иткең киләме - гел генә яҡшы кәйефтә бул!

**(Диоген).**

Йәл, оҙаҡ йәшәмәйбеҙ, үҙ хаталарыбыҙҙың һабаҡтары менән файҙаланып та өлгөрмәйбеҙ хатта.

**(Ж. Лабрюйер).**

Бөйөк эштәр тураһында бер туҡтауһыҙ уйларға түгел, ә эшләргә кәрәк.

**(Юлий Цезарь).**

Ғәҙеллек Алла ҡулында саҡта ғына изге булып ҡала, ә кеше ҡулында ул мәйеттәрҙең ҡабатлау таблицаһына әйләнә.

**(М. Волошин).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кеше Аҡһаҡал эргәһенә килгән дә:**

**- Һеҙгә бер һорауым бар ине. Кеше бер нәмә лә тоймай, бер теләкһеҙ йәшәргә мөмкинме? - тип һораған.**

**- Мөмкин, - тигән Аҡһаҡал.**

**- Улай булғас, ундайҙар кеше тип аталырға хаҡлымы һуң?- тип аптыраған был кеше.**

**- Һин тойғоноң ни икәнен аңламайһың, буғай, - тигән Аҡһаҡал. - Мин үҙенең теләктәренә ирек ҡуйып, тәненә зыян килтермәгән кеше тураһында һөйләйем. Ундай кеше тормошто нисек бар, шулай ҡабул итә һәм йәшәйешен үҙ яйына ҡора белә...**

**- Әммә ул тормош биргәнде яҡшыртыу, камиллаштырыу менән шөғөлләнмәһә, был донъяла үҙен нисек белгертә ала һуң?**

**- Хоҙай беҙгә тән биргән, теләктәргә юл ҡуйып, ошо тәнгә зыян килтермәҫкә, тигәнде аңыбыҙға һалған. Шул ғына! Ә һин үҙеңдең рухыңды тышҡы тәьҫирҙәргә буйһондороу, эске йәшәйеш көсөндө шуның менән емереү тураһында һүҙ алып бараһың. Хоҙай нисек яратҡан, шул асылыңда бул. Ағастарҙы ҡосаҡла, улар менән һөйләш, ел йырына ҡушылып, көй һуҙып ебәр. Арыһаң, уңайлы урын эҙләп ҡаңғырып торма, өҫтәлгә башыңды һалып, серем итеп ал. Хоҙай беҙгә тән биргән дә, уны тормош менән тултырған, ә һин ошо тәнде кәрәкмәгән, осо-ҡырыйы күренмәгән бәхәс-талаштар һәм әңгәмәләр, бер кәрәге булмаған теләктәр менән тултырырға кәрәк, тип ныҡышаһың...Теләктәре алда йөрөгәндәр үҙен барыбер яҡшы яҡтан таныта алмай был донъяла - шуны белеү бик тә кәрәк..."**

1582218911006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Азамат ӘБҮТАЛИПОВ,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 23 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5010
Заказ 220